ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискә Өфө

16-22 сентябрь (нарысай) 2023

№36 (1078)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ирәндек ятҡылыҡтарын...**



эшкәртеү тыйылды

4

**Милләтебеҙҙең...**



үҙ асылына ҡайтыуын сәләмләйек

6

**Тарих төпкөлдәренә сәйәхәт,**



йәки Ҡаҙып асылған хәҡиҡәт

8-10

**Унар ғына һумлыҡ, ай, ун аҡыҡ...**



12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Иғтибар!* 1 сентябрҙән 2024 йылдың беренсе яртыһы өсөн гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы башланды. Аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы ошо осор өсөн дә "Кискә Өфө" (индексы ПР905) гәзитенә 857 һум 04 тингә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр биреүҙе дауам итербеҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе еткерәбеҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!**

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Шәхси хужалығыңда үҫтергәнеңде, етештергәнеңде һата беләһеңме, әллә арзан хаҡҡа алыпһатарҙарға ғына биреп ебәрәһеңме?

***Мәхәмәтйән ИСҠАҠОВ, Баймаҡ районы Сәйғәфәр ауылы:*** Электән малды күпләп тотабыҙ, ауылда йәшәп, малың да булмаһа, ҡуранның ни йәме инде. Бесәнде үҙем эшләйем, бының өсөн барлыҡ техникам бар, сабып, йыйып, өйөп ҡуйылғанын тейәшеп алып ҡайтыр өсөн улым, кейәүҙәр ярҙам итә. Бесән яҡшы үҫкән йылда күберәк эшләп ҡалырға тырышам, берәр кәбән артығыраҡ та эшләнһә, ҡоролоҡ йылында еңелерәк була. Элек малды һуйып, итен Баймаҡ ҡалаһы баҙарында һата инек. Хәҙер быны ауырлығы бар, үҙең ашар өсөр генә кәртәндә һуйып була. Баймаҡҡа мал һуйыу пунктына тейәп алып барып, сират тороп, малыңды ҡурҡытып-өркөтөп, һуйҙырып алырға тейешмен. Әлбиттә, был закондың ыңғай яҡтары ла барҙыр, һатыуға сифатһыҙ ит сыҡмай. Әммә ул ауыл халҡының тормошон бер аҙ ҡатмарлаштыра. Шуға ла беҙ мал һуйырға булһаҡ, тәүҙә һатып алыусы эҙләйбеҙ. Ғәҙәттә, ҡалала йәшәүсе туғандар үҙҙәре үк һан-һан итеп, һатып алып та бөтә.

Ә бына үгеҙ бызауҙарҙы халыҡ "татарҙар" тип атаған алыпһатарҙарға бирергә тура килә. Бының үҙенең сәбәбе бар. Ауылда бит хәҙер көтөү юҡ. Дөрөҫөрәге, көтөүсе табыуы ауыр. Быйыл ярты йәй көтөү булғайны, яртыһында булманы. Ташланы ла ҡуйҙылар. Ә үгеҙ малын көҙгә ҡарай тотоп алып булмай, аҙып ҡына баралар. Шуға ла көҙҙән үк уларҙы урынлаштырып ҡалыу ныҡ ҡулайлы. Арзанға бирәбеҙ, тип иҫәпләмәйем, алыпһатарҙар булһалар ҙа, улар тәҡдим иткән хаҡ баҙар хаҡынан ул ҡәҙәре кәм түгел. Йә юғалып ҡуйыр, тип тә ҡурҡаһың. Ә орғасы бызауҙы ҡыш сығарып, яҙ тотонабыҙ. Халыҡ яҡшы йәшәй хәҙер. Элек ҡыш ҡына ит ашай инек, хәҙер йыл әйләнәһенә ит бар, өй һайын лар һыуытҡыстар. Шуға ла алдан йәүкәләп ебәрәбеҙ ҙә, һатып та ҡуябыҙ.

Йәшелсәнән, ғәҙәттә, картуф ҡына баҙарға сыға торғайны. Һуңғы йылдарҙа картуфлыҡты ла ҡыҫҡарттыҡ. Балалар үҫеп, башлы-күҙле булып бөттө, ул тиклеме кәрәкмәй ҙә. Улым да күпләп сәсә ине, колорадо ҡуңыҙы ҡуймай, төрләсә әтмәләп тә, йыйып та, ағыулап та еңеп булмай шуны. Шуға ла ул да ҡул һелтәне.

## ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# МИЛЛИ БАҪМА КЕМГӘ КӘРӘК?

## Үҙебеҙгә! Балағыҙға!

**Был ни хикмәт: милли матбуғат баҫмаларының тираждары кәмегәндән-кәмей. Мәҫәлән, заманында 74 мең менән сыҡҡан "Йәншишмә" лә мең дананан саҡ ҡына күберәккә тороп ҡалған. Әлеге ярты йыллыҡ өсөн яҙылыусылар һаны тағы ла әҙәйгән. Башҡа гәзит-журналдарыбыҙ хаҡында ла шуны уҡ әйтергә мөмкин: йылдан-йыл алдырыусылар һаны кәмей бара.**

Юҡ, был хәл балаларҙың йәки башҡортса уҡыған йәштәрҙең, ололарҙың әҙәйеүе менән генә аңлатылмай. Мәсьәләнең айышы төптәрәк ята, буғай. Донъялар үҙгәреү менән күп мөһим мәсьәләләр үҙағышына ҡуйылды түгелме? Мәктәптәр ябыла, туған телдәрҙе өйрәнеүгә бүленгән сәғәттәр ҡыҫҡартыла. Милли матбуғатты һаҡлап ҡалыу өсөн, элеккесә, урындарҙағы етәкселәрҙән бер ниндәй ярҙам күрһәтелмәй. Элек, илдә үҙгәртеп ҡороуҙар башланғанға тиклем, мәҫәлән, республиканың Мәғариф министрлығынан һәр мәктәпкә хаттар ебәрелә торғайны. Унда балалар өсөн сыҡҡан "Башҡортостан пионеры"н һәр бала алдырһын, тигән, шулай уҡ башҡа баҫмалар буйынса ла, тәҡдим-кәңәш бирелә ине. Өҫтән шундай күрһәтмә бирелгәс, урындарҙа гәзит-журналдарға яҙылыу дәррәү барҙы. Уҡыусыһы булған һәр өйгә "Башҡортостан пионеры" ("Йәншишмә") гәзите менән "Пионер" ("Аманат") журналы, шулай уҡ "Башҡортостан", "Йәшлек" гәзиттәре, "Ағиҙел", "Башҡортостан ҡыҙы" журналдары килә торғайны. Шул йылдарҙа беҙгә йыш ҡына Балтик буйы илдәрен миҫалға килтерҙеләр: туған телдә сыҡҡан гәзит-журналдарын юғалтмаҫ өсөн хатта һәр бер өйгә өсәр дана баҫмаға яҙыла торғайны улар. Әле, беҙҙең милли гәзит-журналдарыбыҙға ябылыу ҡурҡынысы янағанда, урындағы етәкселәргә битараф ҡалыу халҡыңа, телеңә, милләтеңә хыянат итеүгә тиң түгелме? Күп етәкселәр был яуаплылыҡтан ҡасып, имеш тә, хәҙер беҙ матбуғатҡа яҙылығыҙ, тип баҫым яһай алмайбыҙ, тигән һүҙҙәргә ышыҡлана. Баҫым кәрәкмәй. Тәҡдим кәрәк. Кәңәш итеү мөһим. Хатта талап итеүҙән дә ҡурҡырға ярамай. Милләтте, телде, башҡорт баҫмаларын һаҡлап ҡалыу хаҡына. Ә инде ярҙам итергә теләмәгән, битараф етәкселәр иһә шул сифаттары менән тарихта ҡаласаҡтар бит, шуны ла уйлаһындар ине. Йәйләп-йәйләп гәзит-журналдарҙы электрон вариантҡа күсереү - милли баҫмаларҙы бөтөрөүгә, ябыуға йүнәлтелгән бер юл ул, минеңсә.

**(Дауамы 2-се биттә).**



12+

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# КИҪКЕН ЭСӘК СИРЕ



**Башҡортостанда иерсиниоз сиренең берҙән-бер осрағы теркәлде. Был хаҡта "Башинформ"ға Роспотребнадзор идаралығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итте. Республикала йәшәүсе был кешегә сир бысраҡ йәшелсәнән йоҡҡан.**

"Иерсиниоз беҙҙең ерлеккә хас булған нәмә түгел. Ул, ғәҙәттә, аҙыҡ-түлек аша йоғоусан, - тип аңлаталар Роспотребнадзор идаралығынан. - Иерсиниоздар (эсәк иерсиниозы һәм псевдотуберкулез, йәғни киҫкен эсәк инфекцияһы) - кеше һәм хайуандар өсөн уртаҡ булған һәм билдәле бер тәбиғи биләмәгә хас ауырыу. Иерсиниоз бактериялары тупраҡта, һыуҙа, шулай уҡ ит, һөт, икмәк-булка ризыҡтарында һәм башҡа төр аҙыҡ-түлектә оҙаҡ һаҡланыусан. Әсетеп яһалған һөт ризыҡтарында иерсиниялар - 3 көн, һөттөң үҙендә - 18-гә тиклем, кондитер аҙыҡтарҙа - 16-24, емеш һуттарында - 30-ға тиклем, һыйыр майында - 145 көнгә тиклем, балыҡ, дөгө, картуф, иттә - 8-9 аҙналап, туңдырмала 1,5-8 айға яҡын, ҡайнатылған һыуҙа 1 йылға тиклем һаҡлана.

Роспотребнадзорҙан иҫкәртеүҙәренсә, яңы йәшелсәлә, бигерәк тә уларҙан әҙерләнгән һәм тейешле температурала һаҡланмаған турамаларҙа иерсиниоздар тиҙ үрсей һәм оҙаҡ ваҡыт һаҡлана. Был инфекцияны сысҡандар һәм башҡа шуның кеүек кимереүселәр тарата. Айырыуса күҙ көндәре улар ҡырҙан мал торлаҡтарына, фермаларға, ҡошсолоҡ комплекстарына, йәшелсә һаҡлағыстарға, мөғәрәптәргә күсеп килеп, йәмәғәт малын, йорт хайуандарын, бесәй-эт, өй сысҡандарын, ҡомаҡтарҙы, эре мал һәм ҡошҡортто зарарлай. Роспотребнадзор билдәләүенсә, эсәк иерсиниозы бигерәк тә һөт һәм һөт ризыҡтарынан, ит һәм ит продукттарынан, һыуҙан, әгәр улар ҡайнатылып, тейешле кимәлдә эшкәртелмәй икән, төп зарарланыу сығанаҡтары булып тора. Был сирҙе булдырмаҫ өсөн аҙыҡ-түлектә тейешле шарттарҙа һаҡларға, уларҙы әҙерләү талаптарын үтәргә кәрәк. Һыуҙы ҡайнатып файҙаланыу, тамыраҙыҡ һәм башҡа йәшелсә-емеште ентекләп йыуыу, әҙерләнгән ризыҡты һыуытҡыста дөрөҫ шарттарҙа - сей аҙыҡ-түлектән айырым урында һаҡлау мотлаҡ.

**Вероника НИКИТИНА.**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# МИЛЛИ БАҪМА КЕМГӘ КӘРӘК?



## Үҙебеҙгә! Балағыҙға!

**(Башы 1-се биттә).**

Матбуғат - ҙур тәрбиәүи көскә эйә булған сара. Хатта кире күренештәр, насар хәл-ваҡиғалар тураһында яҙылған мәҡәләләрҙең дә уҡыусыға ғибрәт, фәһем күҙлегенән йоғонтоһо ҙур. Ә ыңғай тәжрибәләр, хеҙмәт алдынғылары, күренекле шәхестәр, сәнғәт оҫталары тураһында яҙылғандары кешеләрҙә матурлыҡҡа өндәй, юғарылыҡҡа әйҙәй. Көнө-төнө интернетта, "Бәйләнештә" ултырған балалар, үҫмерҙәр гәзит, журнал, китап уҡыуҙан бөтөнләй төңөлмәҫме? Ә бит заманында "Башҡортостан пионеры" (хәҙерге "Йәншишмә") гәзитен уҡып үҫкәндәр араһынан ниндәй шәхестәр сыҡҡан! Әле гәзит "Йәш төҙөүсе" булып донъя күрә башлаған 30-сы йылдарҙан үҙенең тәүге шиғырҙарын баҫтырған Мостай Кәрим, Шәриф Биҡҡол, Ғилемдар Рамазанов, Муса Ғәли, Хәким Ғиләжев һәм башҡа әҙәбиәт, сәнғәт әһелдәре Башҡортостандың тарихи шәхестәренә әйләнде. Һуғыштан һуң яңынан 1959 йылда гәзиттең тәүге һанын әҙерләгән Шәриф Биҡҡол, Мөҡәрәмә Садиҡова, Миңлегәле Яҡупов, Әлфинур Вахитова, Сәриә Мәһәҙиева һәм башҡалар башҡорт балаларының, милләттең киләсәге хаҡында уйлап, янып эшләгән. Уларҙың хеҙмәте бушҡа китмәне: бөгөн башҡорт әҙәбиәтенә арымай-талмай хеҙмәт иткән бик күптәрҙең исемдәре, ижад шишмәләре балалар баҫмаһынан - "Башҡортостан пионеры"нан ("Йәншишмә"нән) һуҡмаҡ алған. Былар әҙәбиәт өлкәһендә генә. Ә бит күпме сәнғәт кешеләре, геолог, архитектор, рәссам, журналистар

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Шәхси хужалығыңда үҫтергәнеңде, етештергәнеңде һата беләһеңме, әллә арзан хаҡҡа алыпһатарҙарға ғына биреп ебәрәһеңме?***

***Гөлфирә ХӨСӘЙЕНОВА, Әбйәлил районы Йәнекәй ауылы:*** Элегерәк шул-шул инәй көйәнтәһенә ике биҙрә элеп, йәйәүләп Мәгнит баҙарына муйыл, ҡатыҡ һ.б һатырға йөрөгән тип һөйләй торғайнылар. Ҡапыл донъялар үҙгәреп, колхоз тарҡалғас, беҙҙең быуын ҡатындарына ла ошо юлды тапарға тура килде. Балалар үҫтергән ваҡыт, уларҙы кейендерергә, нисек тә йәшәргә кәрәк, Белорет баҙарына ҡаймаҡ, май, эремсек һатырға йөрөй башланыҡ. Сыр иретергә лә өйрәндек. Йәйәү түгел, шулай ҙа башта 12 саҡрымда ятҡан ауылдағы электричкаға бара инек. Белорет станцияһына килеп төшкәс, күтәргеһеҙ сумкаларҙы күтәреп, автобусҡа ултыраһың. Кире ҡайтыр өсөн уныһына ҡайһы саҡта эләгә алмай, электричкаға һуңлаған саҡтар ҙа, төнгөһөнә ҡалып, 20 саҡрымды йәйәүләп үткән саҡтар ҙа булды. Тығын автобуста сумкаларҙан көшөләктәрҙе лә урлаттыҡ. Аҙаҡтан Өфөгә йөрөгән автобусҡа эләгеп киткеләнек. Һуңғараҡ һәр йортта тиерлек машиналар барлыҡҡа килде. Хәҙер һөйләһәң, кеше ышанмаҫ. Бөгөн һөт ризыҡтарын һатыусылар үҙ машиналарында ғына бара баҙарға, аҙнаһына ике тапҡыр йөрөүселәр бар. Малды ла күпләп тоталар, килем дә алалар, тырышлыҡ ҡына кәрәк.

Шулай ҙа ауылыбыҙҙың Белорет, Магнитогорск ҡалалары яҡын булыуы беҙҙең өсөн ярты бәхет икән. Алып барып һатыр урын булмаһа, нимә эшләр инек? Күҙөн мал-тыуарҙы һуйып, ошо ҡалаларҙың баҙарына алып барып һатабыҙ әле лә. Элегерәк ауылдан ветврач справка бирә, барғас, баҙарҙың ветеринария лабораторияһын ғына үтә инек. Хәҙер, әлбиттә, ҡатмарлыраҡ, малды махсус урында һуйырға, уныһы өсөн байтаҡ аҡсаһы сығарып һалырға тура килә. Беҙгә элегерәк малыбыҙҙы район үҙәге Аҫҡарҙа, бер тапҡыр хатта Белоретта һуйҙырырға тура килде, ә хәҙер үҙебеҙҙең ауылда мал һуйыу пункты - икәү. Уны ауылдың йүнсел егеттәре асты, беҙгә малды тейәп, ауырлығын кәметеп, юл ғазабы күреп йөрөргә тура килмәй. Яҡын-тирә ауыл халҡы тере малын килтереп, һуйҙырып ала. Беҙ итте тейәп кенә китәбеҙ йәрминкәгә. Уны һатып торғоң килмәһә, алыпһатарҙар йүгереп йөрөй, хаҡын килешһәң, бирәһең дә китәһең.

Картуфты ла үҙебеҙ тороп һатабыҙ. Ауылдан, йорттан уҡ килеп алыусы алыпһатарҙар бар ул, тик улар бик осһоҙға ала, унда ла ҡулаҡса бирмәй, тауарға алыштыра. Әйтәйек, быйыл картуфтың биҙрәһе 500 һум, ә улар ике биҙрәгә 5 л үҫемлек майы тәҡдим итә. Мең һумлыҡ май булмай бит инде. Ә бына быҙауҙарҙы ысынлап та Татарстандан килеп йыйыусыларға тапшырғылайбыҙ. Улар тейешле хаҡын бирә биреүгә. Барыһын да иҫәпләһәң, быҙау көйөнә һатыу отошло, тип уйлайым.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың указы менән республикала Пилотһыҙ авиация системалары тармағын үҫтереү дирекцияһы булдырылды. Ҡарар пилотһыҙ авиация системалары тармағын үҫтереү, шул иҫәптән граждандар һәм хәрбиҙәр өсөн пилотһыҙ осоу аппараттары етештереү, тармаҡтың ғилми-технологик, кадрҙар потенциалын үҫтереү өсөн ҡабул ителде. Указ менән Дирекция составы раҫланды, уның рәйесе итеп республиканың сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министры Александр Шельдяев тәғәйенләнде.

✓Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы 10 сентябрҙә, йәғни Берҙәм тауыш биреү көнөндә уҙған VII саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарын һайлауҙың рәсми һөҙөмтәләрен иғлан итте. Республиканың Үҙәк һайлау комиссияһы мәғлүмәттәре буйынса, һайлаусыларҙың тауыштары түбәндәгесә: "Берҙәм Рәсәй" - 1 063 631, КПРФ - 180 696, ЛДПР - 119 373, "Ғәҙел Рәсәй - Патриоттар - Хәҡиҡәт өсөн" - 114 056, "Яңы кешеләр" - 52 688. "Берҙәм Рәсәй" - 41, КПРФ - 6, ЛДПР һәм "Ғәҙел рәсәйҙәр" 4-әр мандат алды.

✓Башҡортостанда дәүләт йомғаҡлау аттестацияһының өҫтәмә сентябрь осоро башланды. Республиканың Мәғариф министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, 7 сентябрҙә - рус теленән төп дәүләт имтиханы, 11 сентябрҙә - туған телдәр, 12 сентябрҙә - тарих, биология, физика һәм география, 15 сентябрҙә - йәмғиәтте өйрәнеү, химия, информатика һәм ИКТ, әҙәбиәт һәм сит телдәр буйынса имтихандар булды. 19-23 сентябрҙә лә өҫтәмә осорҙа төп дәүләт имтиханын тапшырыу өсөн резерв көндәр ҡаралған. Өҫтәмә осор туғыҙынсы кластарға уҙ һөҙөмтәләрен төҙәтергә һәм төп дөйөм белем тураһында аттестат алырға мөмкинлек бирә.

✓Башҡортостан Премьер-министры Андрей Назаров 2024 йылда Ленинградты фашистар блокадаһынан тулыһынса азат итеүгә 80 йыл тулыуға арналған саралар планы тураһында бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Документта билдәләнеүенсә, республикала йәшәгән ветеран-блокадасылар өсөн байтаҡ саралар ойоштороласаҡ. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Ленинград блокадаһы 1941 йылдың 8 сентябрендә башланып, 872 көн дауам иткән. Ҡала тулыһынса 1944 йылдың 27 ғинуарында азат ителгән.

✓ ***Туған телен белеү - ул кешенең мәҙәнилек билдәһе. Ә инде күп телдәрҙе үҙләштереүе донъяның төрлө илдәренең ишектәрен аса. Ҡайҙа ғына булһаң да, һин кем, ниндәй милләттәнһең, тип һораясаҡтар, ҡыҙыҡһынасаҡтар.***

сыҡҡан балалар гәзитен уҡып үҫеүселәр араһынан.

Бөгөн дә әле мәктәптә белем алыусы уҡыусыларҙың мәғлүмәт сығанаҡтары менән ҡыҙыҡһыныуҙарына битараф ҡалырға тейеш түгелбеҙ. Улар туған телдә донъя күргән гәзит-журналдарҙы уҡып үҫмәй, халҡыбыҙ тарихын белмәй, бөгөнгөһө менән ҡыҙыҡһынмай, киләсәк хаҡында борсолмай икән, тимәк, беҙ милли зыялыларыбыҙҙы юғалтабыҙ, тигән һүҙ. Туған телен белеү - ул кешенең мәҙәнилек билдәһе. Ә инде күп телдәрҙе үҙләштереүе донъяның төрлө илдәренең ишектәрен аса. Ҡайҙа ғына булһаң да, һин кем, ниндәй милләттәнһең, тип һораясаҡтар, ҡыҙыҡһынасаҡтар. Шул саҡта халҡы, теле, милләте хаҡында бер ауыҙ һүҙ ҙә әйтә алмаған кеше үҙен теге йәки был халыҡтың вәкиле тип һанай ала микән?

Бер нисә йыл элек Украинала булып үткән йыр бәйгеһе "Евровидение" хаҡында уҡыусылар хәбәрҙарҙыр. Ниңә белер-белмәҫ көйө, вата-емерә, ятлап алған текстарын инглиз телендә йырлайҙар икән барыһы ла, тип гел аптырай инем. Ә унда бәләкәй генә илдән - Португалиянан килгән йырсы Сальвадор Собрал үҙ туған телендә йыр башҡарып, еңеүсе булды. Афариндан башҡа ни әйтәһең! Туған телен белгән, улай ғына түгел, уны донъяға танытҡан йырсыға бер кем дә кәмһетеп ҡараманы, киреһенсә, ул үҙенә ихтирам ғына яуланы.

Туған телгә һөйөү ғаиләнән башлана. Атай-әсәй ғәзиз балаһы менән үҙ телендә һөйләшһә, балалар баҡсаһында башҡортса аралашһа, мәктәптә уҡырға, яҙырға өйрәнһә, өҫтәлендә башҡорт милли матбуғат баҫмалары, китаптар ятһа, балалар туған телендә һөйләшәсәк. Ә беҙгә, өлкәндәргә, уларға ярҙам итергә кәрәк.

***Ҡәҙерле уҡыусылар!*** Милли баҫмаларға яҙылайыҡ, уҡыйыҡ, фекер алышайыҡ, конкурстарҙа ҡатнашайыҡ.

***Олатай-өләсәйҙәр!*** Ейән-ейәнсәрҙәрегеҙгә милли балалар матбуғат баҫмаларын бүләк итегеҙ. Улар әле "Аҡбуҙат", "Йәншишмә", "Аманат" уҡып үҫһә, бер нисә йылдан "Шоңҡар", "Йәшлек", "Башҡортостан", "Киске Өфө" менән дуҫлашыр. Үҙегеҙ алдырған "Ағиҙел", "Ватандаш" журналдарын да бергәләп уҡып, фекер алышығыҙ.

***Мәктәптәрҙә эшләүсе хөрмәтле уҡытыусылар!*** Балаларҙың киләсәгенә, зинһар, битараф булмағыҙ. Үҙегеҙгә тәғәйен предмет дәрестәре биреүҙе генә ҡайғыртып, уҡыусыларығыҙҙың рухи тормошона вайымһыҙ ҡалмағыҙ.

***Етәкселәр, эшҡыуарҙар!*** Өлкәндәргә лә, балаларға ла рухи аҙыҡ - гәзит-журналдарға яҙылып бүләк итһәгеҙ, үҙегеҙгә мең сауап алырһығыҙ. Туғандарығыҙға, тыуған ауылығыҙ мәктәбенә, китапханаларға яҙҙырған милли баҫмаларҙы йөҙәрләгән кеше уҡып ҡыуаныр һәм һеҙгә рәхмәттәр яуҙырыр.

***Милләттәштәр!*** Гәзит-журналдарыбыҙҙың тираждары кәмеүенә юл ҡуймайыҡ. Эште үҙебеҙҙән башлайыҡ һәм башҡаларҙан да шуны талап итәйек. Берҙәм булайыҡ, бергә булайыҡ! Милли баҫмаларыбыҙҙы һаҡлап ҡалайыҡ!

**Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### *Шәхси хужалығыңда үҫтергәнеңде, етештергәнеңде һата беләһеңме, әллә арзан хаҡҡа алыпһатарҙарға ғына биреп ебәрәһеңме?*

***Нәфисә ШӘМСЕТДИНОВА, Ҡырмыҫҡалы районы Ҡарламан ауылы:*** Малды беҙ күпләп тотабыҙ, хатта 10-12 баш булып китә. Уны итләтә һатабыҙ, күбеһенсә үҙебеҙҙең туғандар һатып ала. Сөнки кемдәрҙер һымаҡ, тиҙ үҫтереү өсөн укол-фәлән ҡаҙамайбыҙ. Хәҙер шундай күренештәр ҙә бихисап бит. Ә беҙҙең иттең тәмле, таҙа, хәләл икәнен барыһы ла белә. Бер йылды тауыҡ итен һатып алып ҡараным да, үҙең үҫтергәнгә етмәй икәнен аңланым. Бесәнде күп эшләйбеҙ. Ауылда көтөүҙе сиратлап көтәләр бит, малыбыҙ күп булғас, беҙгә был бурысты бер нисә көн атҡарырға тура килә. Шуға быйыл малды ҡурала тотоп, йәй буйына бесән әҙерләп ашатып сыҡтыҡ. Шул уҡ ваҡытта ҡышҡылыҡҡа ла бесән әҙерләнек. Йәшелсәнең дә артҡаны малға китә, әле бына ҡабаҡ бирә башланыҡ, сөгөлдөр, ваҡ картуф - шуға ла беҙҙең малдың ите тәмле була.

Малһыҙ булмай шул ауылда. Беҙ үҙебеҙ күпләп мал тотоп, йорт һалдыҡ, машина алдыҡ. Етештергәнде Ҡырмыҫҡалыға ла, Өфөгә лә алып барып һаттыҡ. Хәҙер бына Өфөлә беҙҙең кеүек продукцияны үҙе етештергән кешеләргә баҙарҙа ла, урамдарҙа ла сауҙа урындары булдырҙылар. Юҡһа, элек полиция бар ерҙән дә ҡыуа торғайны бит. Шулай бер саҡ Өфөлә, асыҡ урында һатырға ярамай, тип, милиция паспортымды ла ала яҙғайны. Етештергән ризыҡтарҙы бына шулай үҙебеҙ, үҙ ҡулдарыбыҙ менән һатырға тырышабыҙ. Алыпһатарҙарға биргәнебеҙ юҡ. Халыҡ улай тиҙ генә алданмай ул хәҙер. Беҙҙең кеүектәр өсөн махсус йәрминкәләр үткәрәләр, был, әлбиттә, һатыусыға ла, һатып алыусыға ла уңайлы.

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

*ДОНЪЯ ШАНДАУЫ*

# ЯПОНИЯ ОКЕАНҒА ЯҪҠЫНДЫ...

**Кем кем, ә бына радиация зарарына иң күп күләмдә дусар булған һәм бының нимә икәнен үҙ халҡының миллионлаған ҡорбандары миҫалында белгән Япония етәкселегенән бындай хаяһыҙлыҡ һәм ҡанһыҙлыҡты бер кем дә көтмәгәндер.**

Японияның бынан 12 йыл элек ер тетрәү арҡаһында сафтан сыҡҡан "Фукусима-1" атом реакторҙарын һыуытыу маҡсатында ҡулланылған һәм үлемесле хәүеф менән янаусы һыуҙы... Тымыҡ океанға ағыҙа башлауы хаҡында бөтөн донъя тетрәнеп ҡабул итте. Юлын да уйлап тапҡандар бит: радиациялы һыу ярҙан 1 км аралыҡта океан аҫтынан махсус ҡаҙылған туннель буйлап ағыҙыла. Океан төбөнән юл ярып, был ҡара эште йәшерен башҡарырға уйланымы әллә самурай тоҡомдары? Ни өсөн тигәндә, был хаҡта улар донъя йәмәғәтселеген генә түгел, хатта күрше илдәрҙе лә алдан иҫкәртеп тороу кәрәклеген тапмаған. Дөрөҫ, Япония премьер-министры Фумио Кисида был эш хаҡында көнө килеп еткәс кенә белдерә, ләкин ул Ҡытай тарафынан протесты ишетмәмешкә һалыша, күрәһең, ә инде меҫкен балыҡсыларҙың ризаһыҙлығы уның өсөн - океандағы бер тамсы ғына.

Бында шуныһы ғәжәп: ни өсөндөр кешелеккә һәм, ғөмүмән, планетабыҙ хәүефһеҙлегенә ҡарата ҡот осҡос енәйәти ғәмәлдең тәүге этабы шым ғына үтеп тә китте. Көньяҡ Кореяның әүҙем гражданлыҡ төркөмдәре протест акцияһына сығып маташһа ла был әллә ни күҙгә лә эленмәне. Ҡытай Эске эштәр министрлығының да, әгәр Япония ниәтенән баш тартмаһа, яуап аҙымына барасағы ҡоро янау ғына булып ҡалды. Фәҡәт Рәсәй сигенә яҡын йәшәүсе ҡытайҙар беҙҙең Приморье крайынан ашығыс рәүештә һәм күпләп диңгеҙ тоҙо һатып ала башланы: Япония етештергән тоҙҙоң хәҙер кәрәге булмаясаҡ. Рәсәй тарафынан да ниндәйҙер иҫкәртеүҙәр булған, тиҙәр, ләкин ул "Мәскәү-24" каналынан ары китмәгән, буғай.

Был нимә, Японияның хәҙер, ҡасандыр үҙен атом бомбаһына тотҡан АҠШ-тан да кәм булмағанса агрессорлыҡ актымы? Әәә, бына ниҙә эш: Японияның был кешелекһеҙ ҡарарын АҠШ менән... "бөрсә" Тайвань яҡлап сыҡҡан! Ҡарға күҙен ҡарға суҡымай, әлбиттә. Америка белдереүенсә, йәнәһе лә, Япония "дөйөм ҡабул ителгән ядро хәүефһеҙлеге стандарттарына" ярашлы эш итә, ә Тайвань "минең өйөм ситтә", тип йәшәй.

Ә ғалимдар нимә ти? Ҡараштар төрлөсә, тик дөрөҫөн әйткәндә, картаға күҙ һалып алыу ҙа етә: Куросио тигән ҡеүәтле ағым атом станцияһы янынан үтеп, Америка тарафына йүнәлеүсе Төньяҡ-Тымыҡ океанға килтереп ҡоя. Ғалимдар был ике көслө океан ағымының тиҙлеген иҫәпләп, радиоактив һыуҙың кәмендә дүрт айҙан Сиэтл ҡалаһына (Америка) килеп етәсәген күҙаллай. Бына шунда ни тиер Америка? Япондар ышандырырға маташыуынса, радиоактив һыу таҙартыу үткән, тик унда бер ниндәй тәьҫиргә бирешмәүсән тритий тигән элемент нисек бар, шул килеш ҡалған, ә ул, физиктар әйтеүенсә, ни бары 12, 5 йыл үткәс кенә бер аҙ тарҡалыуы мөмкин. Тимәк, уны юҡ итеүсе көс тә, сара ла юҡ - бына нимәлә хәүеф. Башҡалар менән бергә, шул уҡ американдар өсөн дә. Шуныһы ла өслөтә хәүеф булып тора: Японияның океанды зарарлауы әлеге хаяһыҙлыҡ акты менән генә тамамланырға уйламай: был енәйәти эштең башы ғына. Был бысраҡ туннель буйлап 17 көн буйы ағасаҡ. Ә киләсәктә бындай ыу "әҙ-әҙләп" 30 йыл буйы (!) ағыҙыласаҡ, сөнки резервуарҙа йыйылған ағыулы һыу күләме 1,34 млн тонна тәшкил итә...

Ошо хәл менән бәйле, башҡаларҙан айырмалы рәүештә, РФ Дәүләт Думаһының "Ғәҙел Рәсәй - Хаҡлыҡ хаҡына" фракцияһы етәксеһе Сергей Миронов, һәр ваҡыттағыса, ғәҙелһеҙлек күренештәренә битараф ҡала алманы. Ул "Фукусима-1" атом станцияһынан ағыулы һыу ағыҙылыу арҡаһында радиация менән зарарланған балыҡ төркөмдәрен асыҡлау буйынса Роспотребнадзорҙың мәжбүри өҫтәлмә эш башҡарғаны өсөн Япониянан хаҡ түләтеүҙе талап итте. "Япония донъяла бер кемдең башына килмәгәнсә, радиациялы һыуҙы күрәләтә Донъя океанына түгә башланы. Нимә тип кенә ышандырырға тырышһалар ҙа, радиация радиация булып ҡала һәм уның эҙемтәләре ниндәй буласағын берәү ҙә әйтә алмай. Әгәр шул арҡала РФ граждандары зарарлана икән, уларҙы кем дауаларға тейеш?" - тип асырғана депутат. Шул ыңғайҙан С. Миронов Рәсәй тарафынан радиация менән бысраныу масштабтарын өйрәнеү һәм уның зыянын асыҡлау өсөн бик күп көс түгергә тура киләсәген, тимәк, бының өсөн түләүҙән баш тартһалар, Японияның беҙҙәге активтарын дәүләт иҫәбенә күсереүҙе һәм беҙҙең сығымдарҙы шуның менән ҡаплатыуҙы талап итеп сығыш яһаны. Ә йомшаҡ ҡәнәфиҙәрендә ғәфләт йоҡоһона бирелгән башҡа "халыҡ хеҙмәтселәре"нән бер ниндәй өнымдың әлегә булғаны юҡ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостандың етенсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың тәүге ултырышы 5 октябрҙә була. Был хаҡта аҙналыҡ оператив кәңәшмәлә республика етәксеһе Радий Хәбиров белдерҙе. Ул шулай уҡ республиканың һайлау комиссиялары системаһына һәм Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһына рәхмәт белдерҙе.

✓Башҡортостанда грипп буйынса хәл тыныс, прививка яһау кампанияһы әүҙем бара, тип хәбәр итте Роспотребнадзорҙың республика идаралығы етәксеһе Анна Казак. Уның һүҙҙәренсә, бөгөн республикала грипп менән сирләүҙең бер генә осрағы теркәлгән. Белгестәр ышандырһа ла, Башҡортостан Башлығы грипп буйынса хәлде контролдә тоторға ҡушты. Һаулыҡ һаҡлау министрлығының 11 сентябргә мәғлүмәттәре буйынса, республикала 500 меңгә яҡын кеше грипҡа ҡаршы прививка яһатҡан.

✓Салауат ҡалаһынан йәш шахматсы Самира Ишкинина 11 йәшкә тиклемге ҡыҙҙар араһында Рәсәй кубогы этабында ваҡытынан алда еңеү яуланы. Ярыш 1-9 сентябрҙә Анапала уҙҙы. Ҡала мэрияһының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Самира Мәскәү, Краснодар крайы һәм Һарытау өлкәһе спортсылары менән көс һынашты. Беҙҙең йәш шахматсы бөтә партияларҙы ла уңышлы уйнап, этап тамамланырҙан бер тур алда еңеү яуланы, шул рәүешле ул декабрҙә Ярославлдә үтәсәк Рәсәй кубогы финалына ҙур аҙым яһаны.

✓Башҡортостан рапирасыһы Милена Шайморатова "Балтика старты" фехтование буйынса Бөтә Рәсәй турнирының бронза призеры булды. 18 йәшкә тиклемге егет-ҡыҙҙар араһындағы ярыштар Ленинград өлкәһенең "Выборг" спорт комплексында бара. Турнирҙа Рәсәй төбәктәренән 1000-гә яҡын йәш спортсы сығыш яһай. Ярыштарҙа фехтованиеның бөтә төрҙәре тәҡдим ителгән: рапира, ҡылыс, шпага. Спорт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, беҙҙең Милена Шайморатова шпага менән шәхси алышта өсөнсө урынды яуланы.

✓Башҡортостандан Әмир Фәхретдинов "Балтика старты"ның иң шәп рапирасыһы исемен яуланы, тип хәбәр итте Башҡортостандың спорт министры Руслан Хәбибов. Выборг ҡалаһында "Балтика старты" Бөтә Рәсәй кадеттар турнирында егеттәр араһында рапира буйынса ярыштар тамамланды. Ошо турнирҙа ҡатнашҡан 156 спортсы араһынан Башҡортостан вәкиле Әмир Фәхретдинов еңеүсе булды.

*✓ Ирәндек һыртындағы геологик тикшеренеүҙәрҙе ғәмәлдән сығарыу тураһында ҡарарҙы дөрөҫ һәм нигеҙле тип атарға мөмкин. Был биологик төрлөлөктө һәм тарихи-мәҙәни мираҫ ҡомартҡыларын һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирәсәк.*



ҠЫҪҠАСА

# БӨРЙӘНДӘР - АЛДЫНҒЫ!

**Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы күп балалы ғаиләләр һаны буйынса иң алдынғы райондарҙы атаны.** Һуңғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса, республикала 472 мең балалы ғаилә йәшәй, шуларҙың 59 меңе - күп балалы ғаиләләр (2010 йылда - 46,3 мең). Был күрһәткес буйынса республикабыҙ Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында - беренсе, илдә 7-се урында. Республикала күп балалы ғаиләләр һаны буйынса Бөрйән районы алдынғылыҡты бирмәй, унда һәр өсөнсө ғаилә өс һәм унан күберәк бала тәрбиәләй. 2010 йылда бында һәр дүртенсе ғаилә күп балалы тип һаналған. Күп балалы ғаиләләр шулай уҡ Баймаҡ (26,9 процент), Хәйбулла (23,5) һәм Әбйәлил райондарында (23,2 процент) байтаҡ. 2023 йылдың беренсе яртыһында Башҡортостанда тыуымдың иң юғары күрһәткесе Бөрйән районында теркәлгән - мең кешегә 13,6 бала тыуған. Икенсе урында - Әбйәлил районы, мең кешегә 12,2 бала тыуған, өсөнсө урында - Архангел районы (12,1).

✓ **Тәтешле районы Үрге Тәтешле ауылының 1-се урта дөйөм белем биреү мәктәбенә башҡорт шағиры һәм мәғрифәтсеһе Ғәли Соҡоройҙоң исеме бирелде.** Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең ҡарарына Андрей Назаров ҡул ҡуйған. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2021 йылдың ғинуарында Тәтешле районында республикала билдәле башҡорт шағиры, мәғрифәтсе, ғалим, дин әһеле, Ирәкте ырыуы вәкиле Ғәли Соҡоройҙоң тыуыуына 195 йыл тулыуға һәм уның улы, атаһының эшен дауам иткән Ғарифулла Кейековтың 160 йыллығына арналған саралар уҙҙы. Шул уҡ йылдың мартында Башҡортостан Республикаһы Башлығы 2026 йылда суфый шағир һәм мәғрифәтсе Ғәли Соҡоройҙоң (Мөхәмәтғәли Ғәбделсәлих улы Кейеков) тыуыуына 200 йыл тулыуҙы байрам итеү тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы.

✓ **Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов оператив кәңәшмәлә республикала етештерелгән солоҡ балы күләме 6 тонна йәки дөйөм етештерелгән бал күләменең 0,1 процентын тәшкил итеүе хаҡында һөйләне.** И. Фәзрахманов билдәләүенсә, бөгөнгә Башҡортостанда солоҡ балы етештереүселәре буларак рәсми рәүештә 60 умартасы теркәлгән. Шул уҡ ваҡытта, уның мәғлүмәттәре буйынса, был кәсеп таулы-урманлы зонала киң таралған. Кәңәшмәлә түмәр-солоҡ умартасылығын үҫтереүгә йүнәлтелгән программа хаҡында ла һүҙ булды."2023 йылға әҙерләнгән программа буйынса төбәк бюджетынан 20 миллион һум аҡса бүленгән, ул сығымдарҙың 50 процентын ҡаплауға йүнәлтеләсәк", - тип аңлатты Илшат Фәзрахманов. 2030 йылға Башҡортостанда солоҡ ҡорто күсен 5 меңгә тиклем арттырыу планлаштырыла.

КӨНАУАЗ

# ИРӘНДЕК ЯТҠЫЛЫҠТАРЫН...

## эшкәртеү тыйылды



**Радий Хәбиров Әбйәлил һәм Баймаҡ райондарындағы Фәйзулла майҙанында эҙләнеү эштәрен үткәреүҙе контролдә тотоу йәһәтенән ҡаҙылма байлыҡтарҙы файҙаланыу буйынса ведомство-ара комиссия эшенә ыңғай баһа бирҙе.**

"Ошо райондарҙа һәм дөйөм Башҡортостанда йәшәүселәрҙе әлеге билдәмәлә алып барылған эштәр борсой ине. Ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу буйынса федераль агентлыҡ менән байтаҡ һөйләшеү үткәрелде, беҙҙе ишеттеләр. Республикала ятҡылыҡтарҙы эшкәртеү эштәре әүҙем бара, ләкин беҙ ниндәй урындарға бөтөнләй тейергә ярамағанлығын аңларға тейешбеҙ", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы аҙналыҡ оператив кәңәшмәлә.

Хөкүмәт Премьер-министры урынбаҫары Азамат Абдрахманов аңлатыуынса, 1 мартта Ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу буйынса федераль агентлыҡ һәм подрядсы араһында Баймаҡ, Әбйәлил райондарындағы Фәйзулла майҙанында оксидлы марганец мәгдәндәрен эҙләү эштәре үткәреү өсөн контракт төҙөлдө.

"Килешеү шарттарына ярашлы, подрядсы 2025 йылға тиклем Фәйзулла майҙанының геологик төҙөлөшөн тикшерергә тейеш ине. Беҙҙең республикала марганец уҙған быуаттың 30-40-сы йылдарында уҡ асыҡланған. 60-70-се йылдарҙа геофизик, геологик һәм тематик тикшеренеүҙәр үткәрелгән. Дәүләт 30-40 йыл һайын тәбиғәт ресурстары тураһындағы мәғлүмәттәрҙе рәсмиләштереп тора. Шулай итеп, подрядсы был эштәрҙе Рәсәйҙең ер аҫты байлыҡтарын инвентаризациялау дөйөм дәүләт программаһы сиктәрендә башҡарған. Әлеге ваҡытта илдең 10 участкаһында, шул иҫәптән Тымыҡ океанда шундай эштәр бара. Шуныһы мөһим: лицензия файҙалы ҡаҙылмалар табыуҙы күҙ уңында тотмай ине. Тикшереү һөҙөмтәләре буйынса геологик отчет бирелгән. Унда марганец мәгдәндәре сифатлы булмағас, артабанғы эштәрҙе башҡарыу мөмкин түгеллеге билдәләнгән. Әбйәлил районында Көньяҡ Нияҙғол майҙанына быйыл июндә тейешле аукциондың үткәрелмәүе лә шуның менән аңлатыла. Бер заявка ла бирелмәне. Шуға күрә, ҡануниәткә ярашлы, Ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу буйынса федераль агентлыҡ һәм подрядсылар менән ағымдағы йылдың 29 авгусынан яҡтарҙың үҙ-ара килешеүе буйынса дәүләт контрактын тарҡатыу тураһында ҡарар ҡабул ителде", - тип белдерҙе вице-премьер Азамат Абдрахманов.

Уның әйтеүенсә, килешеүҙе өҙөүҙең мөһим факторҙарының береһе булып республика Башлығының Тәбиғәт ресурстары һәм экология министрлығына былтыр сентябрҙә Ирәндек һыртын махсус һаҡланған биләмә булдырыу тураһындағы бойороғо тора.

Фәйзулла майҙанындағы бөтә эштәр ер аҫты байлыҡтарын ҡулланыу буйынса ведомство-ара комиссия контроле аҫтында башҡарылды, ул артабан да ер аҫты байлыҡтары менән файҙаланыусыларҙың эшмәкәрлеген күҙәтеү буйынса эште дауам итәсәк.

"Ирәндек һыртындағы геологик тикшеренеүҙәрҙе ғәмәлдән сығарыу тураһында ҡарарҙы дөрөҫ һәм нигеҙле тип атарға мөмкин", - тине Гуманитар тикшеренеүҙәр үҙәге директоры, сәйәси фәндәр кандидаты Марат Мәрҙәнов. - Был биологик төрлөлөктө һәм тарихи-мәҙәни мираҫ ҡомартҡыларын һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирәсәк. Был ҡарарҙың республикала социаль-иҡтисади тотороҡлоҡто һаҡлау шарттарында әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Этнополитолог һәм тарихсы буларак шуны билдәләп үтергә теләйем: Ирәндек һырты башҡорт фольклорында һәм хәҙерге заман әҙәбиәтендә йыш осрай".

"Башҡортостандың Баймаҡ районында һүҙ эшкәртеү түгел, ә Ирәндек һырты янында урынлашҡан Фәйзулла майҙанындағы марганец мәгдәне запасын баһалау буйынса геологик тикшеренеүҙәр үткәреү тураһында барҙы", - ти Өфө фән һәм технология университетының Сибай филиалы өлкән ғилми хеҙмәткәре Йәлил Һөйөндөков. - Эш Роснедрҙың "Тәбиғәт ресурстарын ҡайтанан эшкәртеү һәм файҙаланыу" дәүләт программаһы сиктәрендә планлаштырылған. Әммә был пландар урындағы халыҡ араһында ризаһыҙлыҡ тыуҙырҙы, бында уларҙы аңларға мөмкин. Эш шунда: участкаға йыш ҡына разведка маҡсатында алтын сығарыусы компаниялар инә, әммә ғәмәлдә шунда уҡ мәгдән сығара башлайҙар.

Марганец запасы буйынса планлаштырылған тикшеренеүҙәргә килгәндә, улар быға тиклем дә үткәрелгән булған һәм геологик минералдар запасының үҙгәрмәүен иҫәпкә алып, Ирәндек һыртында алдан әйтелгән тикшереүҙәр тураһында отчеттарҙы күтәреү генә лә етә ине. Ошонан сығып, урындағы халыҡтың фекерен һәм экосистеманы һаҡлауҙы иҫәпкә алып, тикшереү эштәрен ғәмәлдән сығарыу һәм подрядсы ойошма менән килешеүҙе өҙөү тураһындағы ҡарарҙы нигеҙле тип атарға мөмкин. Был шулай уҡ Әбйәлил районында марганец мәгдәне запасын тикшереүгә лә ҡағыла. Был объект өсөн подрядсы ойошманы һайлау буйынса аукцион үткәрелмәгән. Киләсәктә бындай тендерҙәр, минеңсә, республика һәм муниципалитеттар етәкселеге менән кәңәшләшкәндән һуң ғына иғлан ителергә тейеш".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу буйынса ведомство-ара комиссия Башҡортостан Башлығының 2021 йылдағы указы менән республика территорияһында намыҫһыҙ ер аҫтын эшкәртеүселәрҙең эшмәкәрлеген туҡтатыу маҡсатында ойоштороло. Был структура үҙенең һөҙөмтәле булыуын иҫбатланы. Эшләгән дәүерҙә комиссия ғәмәлдә булған 355 һәм ташландыҡ 96 файҙалы ҡаҙылмалар етештереү урынын асыҡланы. Тәбиғәт ресурстарын вәхшиҙәрсә ҡаҙыған компаниялар лицензияларынан мәхрүм ителде. Ер аҫты байлыҡтарын ҡулланыу өлкәһендә тәртип булдырыу һалым йыйыуҙы һиҙелерлек арттырырға мөмкинлек бирҙе. 2022 йыл йомғаҡтары буйынса был күрһәткес 47 процентҡа артты, бюджеттың өҫтәмә килеме 250 миллион һумдан ашыу тәшкил итә.**

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН, Сергей НИКОЛАЕВ.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡалаһы хакимиәтенең оператив кәңәшмәһендә 23 сентябрь көнө республикабыҙҙа йыл һайын уҙғарыла торған "Йәшел Башҡортостан" экологик акцияһының көҙгө этабының бәрҙәм көнө итеп иғлан ителеүен хәбәр иттеләр. Ҡала башлығы Ратмир Мәүлиев ошо акцияла йыл һайын бик теләп ҡатнашыуы, баш ҡалабыҙҙың 450 йыллыҡ юбилейына тиклем 45 мең ағас ултыртыу бурысы хаҡында иҫкә төшөрҙө.

✓Ағиҙел йылғаһы аша һалынған иҫке күперҙә әле реконструкция эштәре бара. Был күпер үҙенең матур арҡаһы менән билдәле. "Ағиҙел күперенең ошо арҡаһы элек нисек булһа, шул рәүешле яңынан ҡуйыласаҡ", - тип белдерҙе ҡала хакимиәтенең юлдарҙы һәм һалма ҡоролмаларҙы төҙөү һәм ремонтлау буйынса идаралығы начальнигы Константин Паппе.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһы хакимиәтендә кадрҙар үҙгәрҙе. Халыҡ һаулығын һаҡлау бүлеге етәксеһе итеп Эльвира Ибраһимова, хакимиәт башлығының иҡтисад, сәнәғәт һәм эшҡыуарлыҡ мәсьәләләре буйынса урынбаҫар итеп Агарагим Кагиргаджиев тәғәйенләнде.

✓Өфөләге Республика инженер лицей-интернатынан 17 йәшлек Динар Дусов менән Аҫҡар Арыҫланов стандартлаштырыу буйынса Рәсәй йыйылма командаһы составына ингән. Стандартлаштырыу буйынса мәктәп уҡыусылары араһындағы халыҡ-ара олимпиада йыл һайын Көньяҡ Кореяның милли стандартлаштырыу органы - Технологиялар һәм стандарттар буйынса агентлығы (KATS) башланғысы буйынса үткәрелә. Рәсәй командаһы Түбәнге Новгород, Томск, Ҡаҙан, Өфө, Севастополь, Луганск, Чебоксар һәм Новосибирск ҡалаларынан йыйылған туғыҙ уҡыусынан тора.

✓Өфөлә йыл башынан 905 юлтранспорт ваҡиғаһы теркәлгән, был уҙған йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда 24 осраҡҡа аҙыраҡ, 10 кешенең ғүмере өҙөлгән, 1109-ы төрлө дәрәжәләге йәрәхәттәр алған. Был турала 13 сентябрҙә ҡала хакимиәтендәге оператив кәңәшмәлә Эске эштәр министрлығының Өфө буйынса идаралығының ЮХХДИ бүлеге етәксеһе, полиция подполковнигы Рауил Бикбулатов хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, автоаварияларҙың йыш теркәлгән төрө - бәрелешеү һәм йәйәүлеләрҙе тапатыу.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Ваҡытында таҙартып тормаһаң, улар йәмле көҙ көндәрен йәмһеҙләмәй ҡалмаҫ. Тап шуның өсөн сентябрь айында баш ҡалабыҙҙа төҙөкләндереү һәм ағас ултыртыу айлығы сиктәрендә өмәләр уҙғарыла.*



ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# ЙӘМЛЕ ҠАЛАБЫҘ ЙӘМҺЕҘЛӘНМӘҺЕН...

**Өфөгә көҙ килде. Көҙгө Өфө тағы ла нығыраҡ матурлана төшкәндәй: урам буйҙарындағы, газондарҙағы, парк һәм скверҙарҙағы аллы-гөллө сәскәләр, уттай бешеп ҡыҙарышҡан миләш тәлгәштәре, сағыу буяулы япраҡтары менән күҙ яуын алып торған ҡыуаҡ һәм ағастар тик ошо миҙгелгә генә хас йәм бирә баш ҡалабыҙға.**

Әммә миҙалдың икенсе яғы булыуын да онотorға ярамай - аяҡ аҫтарыбыҙға, юлдарға бер туҡтауһыҙ ҡойолған япраҡтар тапалып, көҙгө ямғырҙар аҫтында бысраҡ сүп-сарға әйләнә. Ваҡытында таҙартып тормаһаң, улар йәмле көҙ көндәрен йәмһеҙләмәй ҡалмаҫ. Тап шуның өсөн сентябрь айында баш ҡалабыҙҙа төҙөкләндереү һәм ағас ултыртыу айлығы сиктәрендә өмәләр уҙғарыла. Ә 15-16 август санитария көндәре тип иғлан ителде.

Өфө ҡалаһының Ленин районы хакимиәте ошо көндәрҙә предприятиеларҙы, ойошмаларҙы һәм милектең төрлө формаларына ҡараған учреждениеларҙы йәнәштәге территорияларҙа таҙартыу эштәре үткәрергә саҡырҙы. Тротуарҙарҙағы һәм газондарҙағы япраҡтарҙы йыйып алырға, биналарҙың фасад стеналарын таҙартырға һәм яңынан буярға, витраждарҙы йыуырға, ҡойма-ҡапҡаларҙы ремонтларға һәм башҡа төрлө төҙөкләндереү эштәрен башҡарырға тәҡдим ителә. Ҡалабыҙ таҙа булһын тиһәк, һәр беребеҙҙең ошондай сараларҙа әүҙем ҡатнашыуы фарыз. Баш ҡалабыҙҙың башҡа райондары ла ошондай файҙалы саралар уҙғарыуға ҡушылыр, тип уйлайбыҙ.

# БӘХЕТЛЕ БУЛҺЫН БАЛА САҠ

**14 сентябрҙә баш ҡалабыҙ Волга буйы федераль округында йыл һайын уҙғарыла торған "Бала саҡты ҡайтарыу" тигән фестивалдә ҡатнашыусы 500-гә яҡын баланы ҡабул итте.**

Эйе, ҡыҙғаныска ҡаршы, был балалар үҙ ғаиләләрендә йәшәү мөмкинлегенән мәхрүм ҡалған, улар - беҙҙең федераль округтың 14 республика һәм өлкәләренең балалар йорттарында тәрбиәләнә. Уларға үҙҙәрен ситкә тибелмәгән икәнлектәрен тойоп, йәмғиәткә кәрәкле шәхестәр булып үҫә алыуҙары өсөн унай шарттар булдырыу зарур. Фестиваль ошондай балаларҙы күтәрмәләү һәм йәмғиәттә адаптациялау буйынса ғәмәлгә ашырылған проект сиктәрендә Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров патронатлығында ойошторолдо. Етем балалар фестивале 3 көн барасаҡ, балаларҙы Өфө санаторийҙары ҡабул итә. Улар "МастерОк", "Бала саҡ йондоҙҙары", "Аҡыл палатаһы" конкурстарында, спорт ярыштарында, кулинария оҫталығын күрһәтеүҙә ҡатнашасаҡ, экскурсиялар, дискотекалар ҙа була. Спортсмендар, блогерҙар һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре улар менән "остаз-кластар" уҙғара.

# ҠАҘАНДА ЕҢЕҮ ЯУЛАНЫЛАР

**Ошо йылдың 9 сентябрендә Ҡаҙан ҡалаһының Ҡабан күле буйында үҫмерҙәр һәм йәштәр араһында "Алтын мираҫ" халыҡ-ара кейеҙ баҫыу оҫталығы фестивале уҙғарылды. Уны Татарстан баш ҡалаһының А. Гайдар исемендәге йәштәр үҙәге ойошторғайны. Фестивалдең маҡсаты - милли декоратив-ҡулланма сәнғәтен һаҡлау, балалар һәм йәштәр ижадының заманса яңы формаларын үҫтереү.**

Өфө ҡалаһының 2-се һанлы Балалар сәнғәт мәктәбенең йәш оҫталары - ошо фестивалдең еңеүселәре. Сәнғәт мәктәбе уҡытыусыһы Ләйсән Ғилманова уҡыусыларының кейеҙ баҫыу техникаһында ижад иткән 9 эше юғары баһа алды - улар фествалдең Гран-прийына лайыҡ булды. Баш ҡалабыҙҙың йәш декоратив-ҡулланма сәнғәте оҫталары 12 - 16 йәшлектәр төркөмөндә иң маһирҙары, тип танылды.

"Кейеҙ эштәре коллекцияһы наградалар һәм бүләктәр менән тиҙҙән Өфөгә ҡайтарыласаҡ. Беҙҙең ҡыҙҙарыбыҙ өсөн, шәхси эштәренең ошондай киң ҡолашлы конкурста ҡатнашып ҡына ҡалмай, призлы урындар алыуы һис көтөлмәгәнсә булды. Конкурстың иң юғары дөйөм наградаһынан башҡа, һәр уҡыусыбыҙ үҙ йәше категорияһында лауреат дипломы менән билдәләнде", - тине Ләйсән Ирек ҡыҙы, шатлығы менән уртаҡлашып.

# АҒИҘЕЛДЕҢ АРЪЯҒЫНДА ЛА...

**Дим һәм Затон биҫтәләре араһында, Ағиҙел йылғаһының һул яҡ яры буйында, Козарез ярымутрауындағы урманға ҡаршы "Тәбиғәт ҡалаһы" тип исемләнгән яңы микрорайон төҙөләүе хаҡында өфөләр белә инде.**

Өфөнөң буласаҡ биҫтәһенә нигеҙ һалған DARS инвестиция-төҙөлөш холдингы яҡындағы 15 йылда Өфө биләмәләренең 226 га ерендә 30 мең кешегә иҫәпләнгән, дөйөм майҙаны 1 млн кв. метрҙан артығыраҡ булған торлаҡты сафҡа индерергә ниәтләй. Әлеге көнгә 5 йорт төҙөлөп бөтөп, ҡабул ителгән, биҫтәнең тәүге хужалары яңы фатирҙарын туйлай.

"Тәбиғәт ҡалаһы" бер юлы бер нисә йүнәлештә төҙөлә, бында йәшәргә килеүселәр төрлө варианттарҙан үҙҙәренә оҡшаған фатир һатып алыу мөмкинлегенә эйә буласаҡ. Әлегә беҙ беренсе сиратта планлаштырылған йорттарҙы төҙөүҙә дауам итәбеҙ. Бынан башҡа, тиҙҙән микрорайонға ингән ерҙә һалынған 25 ҡатлы өйҙәрҙән, урман һәм күл күренеп торған, беҙҙең клиенттарыбыҙға бик тә оҡшап төшкән аҙ ҡатлы өйҙәрҙән дә фатир һатып алып буласаҡ", - тиҙәр DARS корпорацияһы хеҙмәткәрҙәре.

ҠЫҪҠАСА

# КҮПТӘР КӨТКӘН КҮПЕР...

**Зинино ауылы янында тимер юл аша төҙөлгән юл үткәргес - күпер сентябрь айында сафҡа индерелергә тейеш булһа ла, ошо ҡоролма таяуҙарының береһе 10 сантиметрға тиклем янтайыу сәбәпле, күперҙе файҙаланыуға тапшырыу ваҡыты 30 ноябргә тиклем оҙайтыла, тип мәғлүмәт бирҙе Константин Паппе оператив кәңәшмәлә.** Мәскәү ғилми-тикшеренеү үҙәге үткәргән аудит һөҙөмтәләре билдәле булғас, ошо проблеманы хәл итеү мөмкинлектәре ҡараласаҡ - етешһеҙлектәре табылған таяуҙың нигеҙен нисек итеп нығытыу буйынса проект институты тәҡдим иткән варианттарҙың береһе ғәмәлгә ашырыласаҡ.

✓ **Өфөлә Нефтехимиктар мәҙәниәт һәм ял паркын төҙөкләндереүҙең икенсе этабы бара, тип хәбәр итте үҙенең телеграм-каналында баш ҡала мэры Ратмир Мәүлиев.** Йәйәүлеләр тротуарын түшәү, тышҡы яҡтыртыуҙы монтажлау, инженер селтәрҙәрен төҙөү, йәшелләндереү, шулай уҡ бәләкәй архитектура формаларын ҡуйыу кеүек эштәрҙе атҡарыу бурысы тора. "Әлеге ваҡытта емереү эштәре башҡарылған. Төҙөкләндереү эштәрен тулыһынса 2024 йылда, ҡаланың юбилейына тамамларбыҙ", - тип йомғаҡ яһаны Ратмир Мәүлиев. Хәбәр ителеүенсә, реконструкцияланған Нефтехимиктар паркы 12 июндә - Ҡала көнөндә асылғайны. Уның янындағы биләмәлә бик күп үҙгәрештәр көтөлә.

✓ **Яңы уҡыу йылында Өфөләге вуз-ара кампусының IQ-парк биләмәһендә заманса һанлы спорт төрҙәре майҙансығы асыу планлаштырыла.** Ул киберспортты үҫтереүгә һәм пилотһыҙ осоу аппараттары операторҙарын әҙерләүгә йүнәлтеләсәк. Был хаҡта "Башинформ"ға БР Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итәләр. Пилотһыҙ осоу аппараттары операторҙарын әҙерләүҙе тиҙләтеү өсөн киберспорт алымдарын яраҡлаштырып, яңы программа булдырыласаҡ. Уның өҫтөндә Өфө вуздарында, колледждарында һәм башҡа уҡыу йорттарында эшләп килгән 15 киберспорт клубтары эшләй. Әйткәндәй, республиканың алдынғы вуздары студенттары Бөтә Рәсәй киберспорт ярыштарында йыш еңеү яулай, улар араһында Counter Strike буйынса иң яҡшы 50 команда иҫәбенә инеүселәр бар.

✓ **Өфө ҡалаһының Салауат Юлаев проспектында һәм Дим шоссеһында барлыҡҡа килгән колеялар юл хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙа.** Был турала Эске эштәр министрлығының Өфө ҡалаһы буйынса идаралығы Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт инспекцияһының бүлек начальнигы, полиция подполковнигы Рауил Бикбулатов хакимиәттең оператив кәңәшмәһендә сығыш яһаны. Ҡала хакимиәтендә Салауат Юлаев проспектындағы эштәрҙе финанслау мөмкинлектәре табылыуы, әлеге көндә подряд ойошмаһын билдәләү буйынса конкурс процедуралары барыуы хаҡында белдерҙеләр. 16 октябргә тиклем муниципаль контрактҡа ҡул ҡуйыласаҡ, быйылғы миҙгелдә ремонт эштәрен тулыһынса тамамлау күҙаллана.

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Күңел төшөнкөлөгө

❖ 1 балғалаҡ айыу ҡурайы (дягиль низбегающий) тамырһабағы һәм тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Нервылар ҡаҡшағанда дөйөм һаулыҡты нығытыусы сара булараҡ ҡулланыла.

❖ 2-3 ҡалаҡ күгүләнгә (горец птичий) 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ашарҙан алда эсергә. Күңел төшөнкөлөгө, нервылар ҡаҡшауы һәм хәлһеҙлек осрағында ҡулланыла.

❖ 1 ҡалаҡ бөтнөк япрағына (мята перечная) 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 10 минут ҡайнатырға. Иртәнсәк һәм төнгөлөккә яртышар стакан эсергә. Йоҡоһоҙлоҡтан да килешә.

❖ 2 ҡалаҡ киптерелгән баланды ваҡлап, 300 мл ҡайнар һыу ҡойорға һәм йылыға төрөп, 6 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне марля аша һөҙөп, 3-кә бүлеп эсергә. Бер нисә көн дауамында ҡуланғанда күңел тыныслығы тойорһоғоҙ.

### Бронхит

❖ Ауырлығы буйынса 1:1:2 нисбәтендә ҡырғыстан үткәрелгән һуған һәм алма, балды бергә бутарға. Балаларҙа йүтәлле бронхитты дауалау өсөн көнөнә кәмендә 6-7 тапҡыр ашатарға. Был дауаны һөҙөмтәлерәк итеү өсөн 1 стакан яңы әҙерләнгән кишер һутына 2 балғалаҡ бал ҡушып, көнөнә 4-5 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсерергә. Йәки яңы әҙерләнгән кишер һутына 1:1 нисбәтендә һөт ҡушып, көнөнә 4-6 тапҡыр яртышар стакан эсерергә.

❖ Жар һәм ҡаты йүтәлле бронхитты аппликациялар ярҙамында дауалайҙар. Туҡыманы ҡырылған керәнгә мансып, яҡшылап һығырға һәм түшкә, тамаҡҡа яҡынырак итеп ябырға. 15 минуттан да оҙаҡ тотмаҫҡа.

❖ Баланы бронхиттан дауалағанда 300 грамм бал һәм 1 алоэ япрғын ваҡлап турап ҡушып, өҫтөнә ярты литр ҡайнатылған һыу ҡойорға. Талғын утта 2 сәғәт тоторға һәм һыуытырға, болғарға. Һалҡын урында һаҡларға. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ашарға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ шул затлы кейемдәрен йылына бер-ике мәртәбә үткән сараларға ғына түгел, ә йышыраҡ, төрлө тамашалар, байрамдар ваҡытында, хатта мәсеттәргә кейһен ине.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Аҡ селән
**(Большая белая цапля)**



Селәнгә ҡарағанда саҡ ҡына бәләкәйерәк, һомғолораҡ, нәзәкәтлерәк. Бөтөн миҙгелдәрҙә лә төҫө ап-аҡ. Ҡош туйы ваҡытында арҡаһында оҙон ҡауырһындар күренә, ҡара суҡышының нигеҙе - һары. Тырнаҡтары һоро йәки ҡара һары.

Донъяның йылы илдәрен үҙ итә. Урманлы, далалы күлдәрҙә оя ҡора. Бик һирәк осраған ҡош. Парлашып, йәки төркөмләшеп йәшәйҙәр, ояларын ҡамышлыҡта, ҡайһы берҙә ағаска ҡора. 3-5 (2-6) йомортҡа һала, инә ҡош менән ата ҡош сиратлап 25-26 көн баҫа. Башҡортостанда Йәнгел, Ағиҙел йылғаларында, Ырымбур өлкәһенең Ерекле һыуһаҡлағысында осраған. Ғалим Сәмиғуллин яҙыуынса, Ырымбур өлкәһендә 1979 йылдан оя ҡора, һаны 500-гә етә.

## Ҡауылдаҡ селән
**(Обыкновенная кваква)**



Ҙур башлы, ҡыҫҡаҡ аяҡлы һәм суҡышлы бәләкәйерәк ҡош. Башы, арҡаһы - ҡара, ҡанаттары һоро, ҡорһағы һәм муйыны аҡ төҫтә. Яҙын баш түбәһендә 3-4 аҡ ҡауырһын барлыҡҡа килә. Суҡышы ҡара, тәпәйҙәре алһыу йәки һары, күҙҙәре ҡыҙыл. Яй оса, әммә һауаға тиҙ һәм вертикаль рәүештә күтәрелә. Төнөн бик әүҙем, ҡауылдап тауыш биргәне ишетелеп тора.

Өфө ҡалаһы һәм Шиңгәкүл тирәһендә 1897 йылда осрай. 1975 йылда Рус Әңгәсәге ауылы эргәһендә Ағиҙел йылғаһында күрәләр. Урал алдында был ҡош туктап ҡына киткән, тигән фекерҙә Фомин. 1997 йылда Ырымбурҙа күренеп ҡала. Ҡыуылдаҡ селәндең беҙгә яҡын йәшәгән урыны - Волга йылғаһы дельтаһы.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

**Һуңғы йылдарҙа һәр милләттең рухи ҡиммәттәрен күтәреүгә ҙур әһәмиәт бирелә. Күп милләтле илебеҙҙә был бар халыҡ өсөн мөһим. Шәхсән беҙгә ҡағылышлы, бөтә донъяға ишетелерлек итеп башҡорт балын, башҡорт ҡымыҙын, башҡорт атын данлаусыларҙың эше баһалап бөткөһөҙ. Районларыбыҙҙа киң йәйелдерелгән "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы эшмәкәрлеген, "Айыҡ ауыл" хәрәкәтен хуплайым.**

# МИЛЛӘТЕБЕҘҘЕҢ...

## үҙ асылына ҡайтыуын сәләмләйек



Башҡорт милли кейеме, биҙәүестәре хаҡында сығыш яһаған авторҙарыбыҙҙың илһөйәрлек рухы менән һуғарылған мәҡәләләрен уҡып, шундай темаға арналған телетапшырыуҙар ҡарап һөйөнәм. Республикабыҙ башлығы Радий Фәрит улының, уның яҡын ярҙамсыларының да, ҡайһы бер сараларға милли стилдә тегелгән кейемдә килеүе күңелгә ята. Башҡорт йолаларына ҡағылышлы төрлө кисәләр алып барыусы ҡыҙҙарыбыҙ, хатта төрлө тамашаға килеүсе тамашасыларҙың да йыш ҡына биҙәкле, тәңкәле түшелдеректә булыуы һөҡландыра. Боронғо өләсәйҙәребеҙҙең кейеҙ баҫыу, балаҫ һуғыу, ҡорама ҡорау һымаҡ йолаларын тергеҙеүгә йүнәлтелгән саралар ойоштороуҙа әүҙем ҡатнашҡан, файҙалы ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе ҡабаттан аяҡҡа баҫтырырға тырышҡан ағинәйҙәребеҙгә рәхмәтлемен. Үҙем бәләкәй сағымда ауылыбыҙҙа ҡайһы бер инәйҙәрҙең шундай шөғөлдәрен күргәнем ҙә торғайным. Һуңғараҡ, был һөнәр эйәләре баҡыйлыҡҡа күскәс, уларҙың балаларының инде "кәрәге ҡалмаған" балаҫ һуғыу станоктарын музейҙарға тапшырыуы хаҡында ишетеп үкенгәнем хәтеремдә (минең өләсәйемдең балаҫ һуҡҡысы ла музейҙарыбыҙҙың береһендә инде хәҙер).

"Киске Өфө"лә "Йәшлек йәшнәүҙәре" тип аталған махсус биттең беренсе һанын күрҙек. Шунда Сулпан Ғариповаһың "Кемдер килен алып ҡыуанды..." тигән бәләкәй генә мәҡәләһенә иғтибар иттем. Башҡорт егете менән матур башҡорт ҡыҙының бергә төшкән фотоһүрәте лә ҡуйылған. Әле генә никах ҡорған был йәштәрҙең милли кейемдә булыуы күңелгә бәлзәм булып ятты. "...Милли костюм - мөһим сығанаҡ, ул халҡыбыҙҙың матурлыҡты нисек тәрән аңлауын сағылдырып тора. Дәүерҙәр үҙгәреп торһа ла, башҡорт бер ҡасан да үҙ асылынан ситкә китмәгән..." тигән юлдар бар мәҡәләлә. Ҡалай матур һүҙҙәр! Яҡташтарыбыҙҙың күптәренең күңел төбөндә "йоҡомһорап ятҡан" милли тойғоларын уятырҙай, бына шундай илһөйәр авторҙарҙың мәҡәләләрен уҡығандан уҡыйы килеп тора.

Халҡыбыҙҙың борон туҡланған ризығына, кейгән кейеменә иғтибар итәйек әле. Башҡорттоң һәр милли ашы - хәләл, шулай уҡ өләсәйҙәребеҙҙең кейгән кейемдәре баштан-аяҡ динебеҙ талаптарына тап килә лә баһа! Күҙҙең яуын алып торған шундай кейемдә төрлө сараларға йыйылған ағинәйҙәребеҙгә ҡарап, боронғо гүзәлдәребеҙҙе күҙ алдына килтерәм: иҫ киткес нәфислек бит! Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ шул затлы кейемдәрен йылына бер-ике мәртәбә үткән сараларға ғына түгел, ә йышыраҡ, төрлө тамашалар, байрамдар ваҡытында, хатта мәсеттәргә кейһә, бына әле генә булып үткән һайлауҙар мәлендә лә кейһен ине. Уларҙан өлгө алып, йәш ҡыҙҙарыбыҙ ҙа ундай кейемдәрҙе кейеүҙе ғәҙәт итер ине. Иғтибар итәйек: ир-егеттәребеҙҙең килештереп уйылған яғалы пинжәк, башҡорт ҡайыулы түбәтәй кейеүе һәр ыҡсым итеп һаҡал ебәреүе генә лә ата-бабаларыбыҙҙың ҡиәфәтен хәтерләтә бит!

Әйткәндәй, милли кейем хаҡында һүҙ сыҡҡанда һәр саҡ мәшһүр шағирыбыҙ Рәйес Түләктең "Башҡортлоҡ" тигән шиғыр юлдары иҫкә төшә:

*Эй, егеттәр, ҡыҙҙар!*
*Ҡандай ихлас бейенегеҙ башҡорт бейеүен.*
*Һәр ҡайһығыҙ иҫбатланы булды*
*Үҙ халҡына булған һөйөүен.*
*Һәр хәлдә мин шулай теләнем.*
*Юҡһа, тотоп башҡорт ҡурайҙарын,*
*Ябынышып башҡорт еләнен,*
*Сәстәренә толом ҡушып үреп,*
*Сәхнә биләүҙәрен беләмен…*
*Ә бына һеҙ!..*
*Сәхнәлә һеҙ, кәмендә - Салауат,*
*Ҡыҙҙарығыҙ, хас та Әминә.*
*Салауаттың анау ыҙалары,*
*Ә башҡорттоң күргән нужалары*
*Таныш ҡайһығыҙҙың тәненә,*
*Таныш ҡайһығыҙҙың йәненә?*
*Һеҙ ҙә алдаһығыҙ…*
*Йәнем сатнар,*
*Телен белмәй үҫер ейәнемдәй,*
*Илен белмәй үҫкән улымдай.*
*Эй, башҡортлоҡ!*
*Сәхнәләрҙән төшкәс,*
*Сисеп ырғытылған еләндәй,*
*Һүтеп ырғытылған толомдай…*

Шағир мин юғарыла телгә алған күренештәрҙе - төрлө сараларға милли стилдә тегелгән пинжәктә килгән ир-егеттәрҙе, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе, милли кәсептәрҙе һәм милли кейем-биҙәүестәрҙе ҡабаттан аяҡҡа баҫтырыу юлындағы ағинәйҙәр хәрәкәте эшмәкәрлеген күрмәй китте шул был донъяларҙан...

...Милләтебеҙҙең үҙ асылына ҡайтыу зарурлығы хаҡында һүҙ ҡуҙғатыуҙары була - шунда уҡ боронғо диндар ата-бабаларыбыҙ күҙ алдыма килә. Тиҫтә быуаттар Ислам дине ҡанундары менән йәшәгән халҡыбыҙҙың йәшәү рәүеше, күпселек ғөрөф-ғәҙәттәре шәриғәт ҡанундарына тап килеп, шунан ситкә тайпылмай һаҡланып ҡалған булһа кәрәк. Борон-борондан олатайҙарыбыҙ ул-ҡыҙҙарына мосолман исеме ҡушырға тырышҡан, балаларын да мөмкин тиклем уҡытып, уларға дини белем бирергә ынтылған. Башҡорттар араһында уҡымышлы кешеләребеҙ һәр саҡ булған. Шуға ла дини асылыбыҙға ҡайтыуыбыҙ милләтебеҙ бөтөнлөгөн һаҡлау өлкәһендәге проблемаларыбыҙҙы хәл итер һымаҡ, тип уйланыла.

Берҙән, диндар халыҡта эскелеккә ҡаршы көрәш тә көнүҙәк мәсьәлә булып тормаҫ ине, сөнки динебеҙҙең хәмерҙе ҡәтғи тыйыуы бар кеше өсөн ҡанун була. Икенсенән, Ислам динен тотҡан ғаиләләр, ғәҙәттә, балаларын туған теленә өйрәтеү яғында. Үҙҙәре дин юлындағы ата-әсә ғәзиздәрен башҡорт мәктәбенә уҡырға бирергә тырышыуын беләм. Өсөнсөнән, Ислам дине рухында тәрбиәләнгән балаларҙа әхлаҡ мәсьәләһе лә ыңғай хәл ителә бара. Үкенескә, күптәребеҙ дин өлкәһендә бер ни өйрәнергә теләмәй, тик йылына бер мәртәбә йыйын килеп, мулла уҡығандан һуң, һис нәмә аңламаған көйө, ҡуш ҡуллап бит һыпырып ултырыуҙан ғына ҡәнәғәт. Ғүмерендә бер мәртәбә лә Аллаһҡа баш эймәгән көйө был донъянан китеп барыуы - аяныслы! Уҡымышлы имамдарыбыҙ күп бит хәҙер, ана шуларҙан дин ғилемен өйрәнһәк, файҙаға ғына булыр ине. Башҡорт милләтен һаҡлап ҡалыу, үҫтереү эшендә дини мәсьәләләрҙе икенсе планға ҡуйыу, түтәлде төрлө ашлама менән туҡландырып, әммә уға һыу ҡойоуҙы бөтөнләйгә инҡар итеүҙе хәтерләтә. Боронғо асылыбыҙға һәр тарафтан ҡайтып, шул иҫәптән динебеҙҙе лә мотлаҡ һаҡлап ҡалһаҡ ҡына, милләтебеҙ имен булыр, ин шәә Аллаһ.

**Әйткәндәй, башҡорттоң "үҙ асылы" тигәндән, "асыл" һүҙе ғәрәпсәнән урыҫ теленә - "корень, основа, подлинник, оригинал, настоящий, первозданный вид", ә башҡортса-урыҫса һүҙлектә "суть, сущность" тип тәржемәләнгән. Һәр хәлдә, бында әллә ни айырма юҡ. Яҙыусы Әхмәр Үтәбай яҙыуынса, данлыҡлы Буранбай сәсәндең бер туған ҡустыһы Асыл исемле булған. Ҡаҙаҡтар балаларына әле булһа был исемде (Асель) ҡуша. Минең иң бәләкәс ейәнсәремә улым менән киленем дә ана шул исемде һайланы. Борон-борондан атай-олатайҙарыбыҙ улдарына Асылбай, Асылйән йә Аҫылғужа, ҡыҙҙарына Аҫылбикә тигән исемдәр биргән. Хаҡ динебеҙ менән килеп инеп, халҡыбыҙ лөғәтендә нығынып алған бихисап башҡа ғәрәп һүҙҙәре һымаҡ уҡ, был һүҙ ҙә ана шулай бер аҙ икенсерәк мәғәнәгә эйә булған "аҫыл"ға әйләнеп киткән булһа кәрәк.**

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

✓ *Ошондай сихри тәбиғәт ҡосағында йәшәп, башҡорт фантазия һәм шиғри хыялланыуы өсөн бай аҙыҡ таба һәм үҙенең моңло йырҙарын тыуҙыра, көй ижад итә.*



*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Дүртенсе бүлек. Көньяҡ Урал гун эпохаһында



Боронғо телдәр белгесе, академик Н.Я. Маррҙың фекерен белеү шулай уҡ ҡыҙыҡлы булыр. Ул төрки телдәренең килеп сығышын Үҙәк Азия менән генә бәйләүҙе тупикҡа илтеүсе тәғлимәт, тип яҙа. Азия материгының бер-береһенән алыҫ ятҡан ике яғында таралып йәшәгән боронғо төркиҙәр хаҡындағы бәхәсһеҙ факттарҙың ике төркөмөн иҫәпкә алһаҡ, төрки халыҡтары этногенезының иң боронғо этаптарын нисек аңлатырға була һуң? Үрҙә яҙылғандар үҙенән-үҙе һығымта эшләү мөмкинлеген бирә. Боронғо яҙма сығанаҡтарҙан алынған факттар б.э. тиклем IV - I быуаттарҙа уҡ Азия, Көнсығыш һәм Үҙәк Европа халыҡтарының этносы һәм телдәре яғынан үтә ныҡ ҡатнаш булыуын асыҡ күрһәтә: боронғо төркиҙәр ҙә унда башҡа тел системаларына (һинд-иран, фин-уғыр һ.б.) ҡараған ҡәүемдәр араһында йәшәй. Бындай һығымта боронғо төрки тел берлеге формалашыуының бик боронғо дәүерҙәрҙә башланғанын белдерә, әммә мезолит һәм неолиттан да һуңыраҡ түгел, шул уҡ ваҡытта боронғо төркиҙәр биләгән территория мәсьәләһе асыҡланмаған әле.

Неолит, энеолит һәм бронза эпохаларында Евразия далалары ҡәбиләләренең, шул иҫәптән Көньяҡ Урал төбәгенең дә, ниндәй этностарҙан хасил булыуы мәсьәләһенә кире ҡайтып, бындағы ҡәүемдәр составында боронғо төркиҙәрҙең дә булыуын иҫәпкә алмайынса, ошо халыҡтарҙың иран, фин-уғыр, самодий ҡәбиләләренән генә тороуын раҫлауҙы дәлилле тип әйтеп булмай. Ысын фән ошондай нигеҙһеҙ раҫлауҙарҙан азат булырға тейеш: улар ғилми фекерләүҙең объектив йүнәлештә үҫеүен тотҡарлай.

II - IV бүлектәрҙә сағылдырылған мәғлүмәттәрҙән сығып, башҡорт халҡының боронғо ата-бабалары хаҡында бер нисә һығымта эшләйек.

***1.*** Хәҙерге башҡорттарҙың һәм ҡайһы бер башҡа халыҡтарҙың (мәҫәлән, сыуаштарҙың) матди мәҙәниәтендә традицион халыҡ кейеменең бик мөһим элементтары (ҡатын-ҡыҙҙарҙың күкрәксәләре, сәсҡаптары) һаҡланып ҡалған, килеп сығышы менән улар Көньяҡ Уралдың бронза быуаты (б.э. тиклем XIX - XIII бб.) ҡәбиләләренең шундай уҡ биҙәүестәренә барып тоташа. Бик күп башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының, йәшенә ҡарамайынса, әлегә тиклем күкрәксә һәм сулпылы сәсҡап кеүек биҙәүестәрҙе ҡулланыуы уларҙың барлыҡҡа килеүе һәм үҫешенең, башлыса, Тарихи Башҡортостан менән бәйле булыуына дәлил.

***2.*** Көньяҡ Урал төбәгенең күсмә ҡәбиләләре хаҡында яҙған саҡта Геродот иҫкә алған ҡайһы бер этнонимдар башҡорттарҙа беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланып ҡалған. Уларҙан дай, дахо, даик (башҡорттарҙа - йайыҡ этнонимы, Яйыҡ гидронимы), исседон (башҡорттарҙа Исәт гидронимы) атамаларын миҫалға алырға мөмкин. Башҡорттарҙың матди мәҙәниәтенең сак-скиф замандарынан бирле һаҡланып ҡалған мөһим элементы - өҫкө өлөшө өсмөйөшлө итеп тегелгән баш кейеме.

***3.*** Башҡорт халҡының милли ҡомартҡыһы - "Урал батыр" эпосы Көньяҡ Урал төбәгендә беҙҙең эра сиктәренән дә һуңыраҡ булмаған ваҡытта ижад ителгән. Бынан хәҙерге башҡорттар менән ошо эпик ҡомартҡыны сығарыусылар араһында туранан-тура генетик бәйләнеш булыуы күҙаллана.

***4.*** Рәсәйҙең һәм бөтөн донъяның күренекле төркиәтселәре боронғолоҡтоң барса осорҙарында ла Евразия ҡәбиләләренең этник составы бик ҡатмарлы булғанын һәм улар араһында боронғо төрки телендә аралашыусылар ҙа булыуын ышаныслы факт, тип иҫәпләй. Археологик материалдар Ә.-З. Вәлиди Туғандың, Ж. Ғ. Кейекбавтың, С.Е. Маловтың, С.И. Руденконың, М.З. Зәкиевтың, Ф.Ғ. Ғарипованың һәм башҡаларҙың Дала Евразияһының иртә күскенселәре (гундар, сактар, усундәр, скифтар һ.б.) араһында төрки телле ҡәбиләләрҙең күберәк булыуы һәм башҡорт теле формалашыуының иртә этаптары тап ошо осорға ҡарауы хаҡындағы һығымталарына ҡаршы килмәй.

***5.*** Башҡорт халҡының иң боронғо үҙәге формалашҡан территория, киңәйтеп алынған мәғәнәһендә, Көньяҡ Урал төбәге менән тап килә, был - башҡорт халҡының тарихи ватаны.

***6.*** Башҡорттарҙың иң боронғо ата-бабалары Көньяҡ Уралда үтә боронғо дәүерҙәрҙән бирле йәшәгән. Боронғо башҡорт этносының үҙәге формалашыуҙа төрлө археологик осорҙарҙа (бронза, иртә тимер быуаты) көн иткән ҡәбиләләр төркөмдәре ҡатнашҡан, һәм хәҙерге башҡорттарҙың матди һәм рухи мәҙәниәтенең иң боронғо элементтары уларҙың мәҙәниәтенә барып тоташа.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Калинковичи-Мозырь һөжүм итеү операцияһы. Мозырь рейды

1944 йылдың 8 - 14 ғинуары арауығындағы 6 көн эсендә 7-се гвардия атлы корпусы дошманды ҙур юғалтыуҙарға дусар итә: немецтарҙың 1,5 мең самаһы һалдаты һәм офицеры сафтан сығарыла, 250-һе әсиргә алына, уларҙың 300 аты беҙҙең ғәскәр ҡарамағына күсә. Дошмандың 10 танкыһы, 6 штурм орудиеһы, 400 автомашинаһы юҡ ителә. Корпус командирының сәйәси бүлек буйынса урынбаҫары В.А. Стераненко 16-сы гвардия атлы дивизияһы яугирҙарын уңышлы тамамланған һөжүм һөҙөмтәләре менән тәбрикләп, уларға шундай һүҙҙәрен еткерә: "Һеҙҙең дивизияғыҙ һәр саҡта ла корпустың авангардында барҙы. Һеҙ 120 саҡрым юл үттегеҙ, 39 ауылды дошмандан азат иттегеҙ. Һеҙ дошмандың ҡеүәтле ҡаршылыҡ күрһәтеү үҙәктәре булған Слободка, Слобода, Моисеево ауылдары өсөн батырҙарса алыштығыҙ. Уларҙы ошо үҙәктәрҙән ҡыуып сығарып, һеҙ 14-се һәм 15-се гв. атлы дивизияларына Мозырҙы азат итеү өсөн ҡыҫҡа юл астығыҙ".

Юғары Баш командующий Иосиф Сталин үҙенең 1944 йылдың 14 ғинуарындағы бойороғонда корпустың шәхси составына рәхмәт (благодарность) белдерә. СССР Юғары Советы Президиумының 1944 йылдың 15 ғинуарындағы Указы менән командование ҡуйған бурыстарҙы өлгөлө үтәгәне өсөн 16-сы гвардия атлы дивизияһы Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Шул уҡ көндә Черниговты азат иткәндә һәм Днепр өсөн барған алыштарҙағы ҡаһармanлыҡтары өсөн дивизиябыҙҙың 54 яугирына Советтар Союзы Геройы исеме биреләүе хаҡындағы Указ да иғлан ителә.

Немецтарҙың Мозырь төркөмө ғәскәрҙәре ҡалдыҡтары Уборть йылғаһының көнбайыш яры буйында һәм Птичь тимер юл станцияһы районында, Скольдино, Глиницы, Моисеевичи ауылдары янында нығытмалар төҙөп, оборонаға ныҡлап әҙерләнә башлай. Фронт командованиеһы корпус алдында яңы бурыстар ҡуя: 61-се армия частары менән бергәләп Припять йылғаһының уң яҡ яры буйлап һөжүмгә күсергә һәм Скрыгалово - Балажевичи - Острожанка рубежына сығып, артабан Уборть йылғаһы буйлап Лельчицы торлаҡ пунктын азат итергә бойорола. Корпус командирының бойороғон үтәп, 16-сы атлы дивизия гвардиясылары, дошмандың ваҡ төркөмдәрен тар-мар итеп, Скрыгалово - Осовец - Глушицы - Сом ауылдары рубежына сыға. Шул саҡта ошоға тиклем 3-сө гвардия атлы дивизияһы оборона тотҡан 28 саҡрымлыҡ арауыҡтағы алғы һыҙыҡҡа күсеп, ундағы частарҙы алыштырыу хаҡында бойороҡ алына. Әммә был бойороҡто теүәл үтәү өсөн дивизияның тере көстәре етерлек булмай: һәр полкта 4 эскадрон урынына 2-шәр эскадронлыҡ ҡына атлылар ҡала.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ*

# ТӘБИҒӘТТЕҢ МОҢОН...

## йырҙарына күсергән был халыҡ



**Сергей Гаврилович Рыбаков (1867 йылдың 27 сентябрендә тыуған) күренекле рус музыкант-фольклорсыһы булған. Рәсәй Фәндәр академияһы заданиеһы буйынса ул илдең төрлө төбәктәренә бер нисә экспедиция яһаған, шул иҫәптән Башҡортостанға 1893, 1894 һәм 1896 йылдарҙа килгән.**

Уға беҙҙең яҡтар бик ныҡ оҡшай. Уралдың ғәжәйеп тәбиғәте башҡорт халҡының музыкаль-поэтик ижады үҫешенә ҙур йоғонто яһауына ышана ул. "Башҡорттар йәшәгән Урал тауҙары, уның тәбиғәте хозур, - тип яҙа Сергей Рыбаков. - Иҫәпһеҙ-һанһыҙ тауҙар теҙмәһе, туғайҙар, үҙәндәр, тарлауыҡтар бер-береһен алмаштырып, аҙым һайын тиерлек юлсыға береһенән-береһе матурыраҡ күренештәр бүләк итә. Ошондай сихри тәбиғәт ҡосағында йәшәп, башҡорт фантазия һәм шиғри хыялланыу өсөн бай аҙыҡ таба һәм үҙенең моңло йырҙарын тыуҙыра, легендар үткәне һәм мөһабәт тауҙарҙың, икһеҙ-сикһеҙ яландарҙың һәм үткеһеҙ урмандарҙың хуш еҫе менән һуғарылған аһәңле көй ижад итә".

Бай экспедиция материалдары ғалимға ҡыҙыҡлы хеҙмәттәр тыуҙырырға ярҙам итә. 1895 йылда ул "Ҡурай, башҡорт музыка ҡоралы" тигән тикшереүен тамамлай. "Урал мосолмандарының көнкүрешен сағылдырған йырҙары һәм музыкаһы" хеҙмәте 1897 йылда донъя күрә. Унда башҡорт музыка-шиғриәт фольклорына арналған бүлек - иң тулыһы һәм ҡыҙыҡлыһы. Китапта башҡорт һәм татар халыҡтарының 204 көйө бирелгән.

Бына нисәмә тиҫтә йылдар инде төрлө быуын ғалимдары, фундаменталь тикшеренеү булараҡ, уға мөрәжәғәт итә.

Сергей Рыбаковтың үҙенең ижады ла тикшерелә. Сәнғәт фәндәре кандидаты Людмила Петровна Атанова үҙ ваҡытында уның "Башҡорт әкиәттәре, хөрәфәттәре һәм ғөрөф-ғәҙәттәре" тигән ҡулъяҙмаһына иғтибар итә. Ҡулъяҙма Рәсәй География йәмғиәте архивында һаҡлана һәм быға тиклем уға тикшеренеүселәрҙең береһе лә иғтибар итмәгән була. Рыбаковтың 1894 йылда элекке Ырымбур губернаһының Орск һәм Верхнеуральск өйәҙҙәре башҡорттарынан яҙып алған ике әкиәте күсереп алына. Был "Батша улы Сиржатйән" һәм "Баһадир Ғәли" әкиәттәре. Рыбаков уларҙы башҡорттарҙан башҡорт телендә тыңлаһа ла, русса яҙып алған. Батша улы Сиржатйән тураһындағы әкиәт тапҡыр, сос, тоғро һәм ҡыйыу ҡатын тураһындағы әкиәт сюжеты варианттарының береһе. Ул мажараларға бай, тылсымлы әкиәттәргә хас фантастика элементтары ла күп. Баһадир Ғәли хаҡындағы әкиәткә килгәндә (Рыбаков уның жанрын легенда йөкмәткеле хикәйә тип билдәләй), профессор Ғ.Б. Хөсәйенов уны, XVII-XVIII быуаттарҙағы боронғо китаптар буйынса билдәле ҡисса, тип билдәләне, унда баһадир Ғәли тураһындағы сюжет дини мосолман ауыҙ-тел ҡомартҡыһы формаһында әйтеп бирелгән. Баһадир Ғәли тураһындағы был ҡиссаның русса тәржемәһе билдәһеҙ булған. Шулай итеп, Л.П. Атанованың Рыбаковтың архив ҡулъяҙмаһын тикшереүе башҡорт халыҡ ижадының элек билдәһеҙ булған өлгөләрен фәнни әйләнешкә индерергә булышлыҡ итте.

Бынан тыш, ғалим "Урал буйлап, башҡорттар араһында" тигән юлъяҙмалар, "Татар, башҡорт һәм типтәр халыҡ йырҙары тураһында" мәҡәлә һәм башҡа музыкаль-этнографик хеҙмәттәр яҙған. Рыбаковтың эҙләнеүҙәренең һәм тикшеренеүҙәренең дауамы булып уның тауыш һәм фортепиано өсөн башҡорт һәм татар көйҙәрен эшкәртеүе тора. Ул "50 татар һәм башҡорт йыры" йыйынтығын баҫмаға әҙерләгән. Йыйынтыҡтың бер өлөшө генә баҫтырып сығарылған. Шулай уҡ Башҡортостан буйлап йөрөгәндә йыйған башҡорт мәҡәлдәре, әйтемдәре һәм йомаҡтары ҡулъяҙма көйөнсә ҡалған.

Өфөнөң Орджоникидзе районындағы урамдарҙың береһе (элекке Микоян) 1957 йылдың ноябренән алып Сергей Рыбаковтың исемен йөрөтә. Был - башҡорт халҡының талантлы ғалимға ихтирам билдәһе.

✓ ***Биҙәктәр - боронғо дәүер кешеләренең сакраль билдәләре. Һауыт-һабала кеше һыу, аҙыҡ-түлек һаҡлай, уны аш-һыу өсөн ҡуллана. Ә сакраль биҙәктәр уларҙы төрлө сирҙәрҙән ҡурсалау ролен үтәгән, тип фараз итергә була.***



**Ағымдағы йылдың 20 авгусында олуғ ғалим, билдәле тарихсы-археолог, тарих фәндәре докторы, академик Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитовтың тыуыуына 90 йыл тулды. Һис шикһеҙ, туған халҡы уны үҙенең иң арҙаҡлы улдарының береһе итеп таныны. Уның ҡыҙы, тарих фәндәре кандидаты, атаһы кеүек археолог һөнәрен үҙ иткән Әлфиә Нияз ҡыҙы СОЛТАНОВА менән әңгәмәбеҙ Н.А. Мәжитовтың яҡты иҫтәлегенә арнала.**

**Әлфиә Нияз ҡыҙы, атайығыҙ тураһындағы һүҙҙе ул тәрбиә алған ғаилә - олатай һәм өләсәйегеҙ тураһында иҫкә төшөрөүҙән башлайыҡ...**

- Мин олатайым һәм өләсәйем тураһында башҡаларҙан ғына ишетеп беләм. Атайым һөйләүенсә, өләсәйем үтә баҫалҡы һәм ябай ауыл ҡатындарынан булған. Йөклө көйөнсә колхоз баҫыуынан ҡайта икән дә, тыуҙырыр мәле еткәс, өҫтәл аҫтына инеп ята һәм һис бер тауышһыҙ, тамсы ла иңғырашмайынса ғына сираттағы балаһынан бушана. Шунан бер ни булмаған кеүек, йорт эштәренә тотона икән. Бына шулай ул ваҡыттағы ҡәҙимге башҡорт ғаиләһендә 8 бала донъяға килә: Фәриҙә, Шәһит, Рауза, Нажия, Рәйфә, Нияз, Клара һәм Винер. Олатайҙың барса балалары ла уҡыуға әүәҫ була, ул, күрәһең, үҙе лә уларҙа белемгә ынтылыш тәрбиәләй алған: һигеҙе лә юғары белем факультетына уҡырға инергә күндерә. Шулай итеп атайым 1951 йылда М. Горький исемендәге Молотов дәүләт университетының (хәҙерге Пермь дәүләт милли тикшеренеү университеты) тарих-филология факультетының тарих бүлегенә уҡырға инә. Өйҙән бер ниндәй ҙә ярҙам булмай, өҫтөндә - күп йыуыуҙан таушала башлаған берҙән- бер костюм, аяҡтарында - иҫке ботинка, ә кеҫә - буш. Атайым университеттың профсоюз комитетына инеп, матди ярҙам һорай. Уны тәүҙә профсоюзға ағза итеп алалар, шунан бер аҙ аҡса бирәләр. Профкомда уға билдәле ғалим Отто Бадерҙың археологик лабораторияһына инеп сығырға тәҡдим итәләр. Лабораторияла уға эш табыла - әле генә археологик экспедицияларҙан алып ҡайтылған керамика ярсыҡтарын ҡағыҙға теркәп ҡуйыу (шифрлау) бурысы йөкмәтелә. Шифр һуғылған һәр ярсыҡ өсөн 2 тин аҡса түләнә. Атабара. Йәй көндәрендә ул ялан экспедицияларына йөрөй, ә өсөнсө курстан һуң унын үҙенә айырым үҙаллы эштәр тапшырыла, уға эш хаҡы ла түләйҙәр. Атайым 1956 йылда Пермдән Өфөгә ҡайта һәм Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалында, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында кесе ғилми хеҙмәткәр вазифаһында хеҙмәт юлын башлай. Әлбиттә, унын төп шөғөлө - археологик тикшеренеүҙәр була. 1963 йылда СССР Фәндәр академияһының Археология институтында Бахмут мәҙәниәтен тикшереүгә арналған кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлай. 1968 йылда башҡорт телендә "Башҡорт археологияһы" монографияһын баҫтыра. 1976 йылда унын етәкселегендә республиканың археологик ҡомартҡыларының тәүге атласы - "Башҡортостандың археологик картаһы" ("Археологическая карта Башкирии") нәшер ителә. 1977 йылдан башлап Башҡорт дәүләт университетында доцент, һуңынан профессор вазифаларында эшләй. Археология һәм этнография музейын ойоштороуҙа әүҙем ҡатнаша. Һис һүҙһеҙ, атайым Башҡортостандың археология мәктәбенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе булып таныла.

**Замандаштарыбыҙ араһында археология фәненән файҙа юҡ, ҡәберлектәрҙән ҡаҙып сығарылған һөйәктәрҙең, көршәк ярсыҡтарының, уҡ башаҡтарының, башҡа нәмәләрҙең бер кәрәге лә юҡ, тиеүселәр ҙә бар. Әммә тарихты археологиянан башҡа унын бөтә нескәлектәрендә күҙ алдына ла килтереп булмай. Археология - тарихҡа алып инеүсе ҡапҡа ул, тип тә әйтеп булалыр...**

- Мин студенттарыма шулайыраҡ аңлатам: яҙма сығанаҡтар буйынса тарихты башлыса 10 - 12 мең йыл ваҡыт арауығында ғына өйрәнеп була. Ә бына археология фәне аша беҙ кешелек донъяһының үҫеш йүнәлештәрен Homo habilis (оҫол кеше) тип аталған табылдыҡтарҙан башлап беләбеҙ - улар йәшәгән дәүерҙәрҙән сама менән 2,3 - 1,5 млн йыл ваҡыт үткәне билдәле. Унан һуң Homo erectus (тура баҫып йөрөүсе кеше)

# ТАРИХ ТӨПКӨЛДӘРЕНӘ

## йәки Ҡаҙып асылған хәҡиҡәт

алыуға өлгәшә. Абдулхаҡ олатайым Граждандар һәм Бөйөк Ватан һуғыштарында ҡатнашҡан, ғүмере буйына ауыл уҡытыусыһы булып эшләп, уҙған быуаттың 50-се йылдары аҙағында донъя ҡуйған. Атайым Абдулхаҡ олатайымдың бик әүҙем кеше булыуын, йәш сағында Блюхер отрядында бергә һуғышып йөрөгән яуҙаштары менән йыйылышып, шул саҡтарҙы хәтерләп, оҙаҡ итеп һөйләшеп ултырыуҙарын иҫкә ала торғайны. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, олатайым һәм унын өлкән улы фронтҡа китә. Әсәләре колхоз эшенән бушамай, ғаилә йөгөнөң ҙурыраҡ өлөшө Нияздың оло апаһы Раузаға иңенә төшә. Рауза Ташаҫты ауылы мәктәбендә башланғыс класс балаларын уҡыта, ул атайымдың тәүге уҡытыусыһы була. Атайым мәктәптә уҡыған сағын хәтерләгәндә, көлөмһөрәп, шулай ти торғайны: "Кайһы саҡта малайҙар өйгә эштәрен эшләмәй килә, апайым уларҙы әрләй-әрләй ҙә, асыуын минә йүнәлтә - унлы-һунлы һелтәп тә ебәрә, малайҙарҙың һәлкәүлегенә мин ғәйепле булып сығам инде". Нәҫел яғынан ҡарағанда, атайыма әсәһенән баҫалҡылыҡ, йомшаҡ холоҡло булыу, хатта интеллигентлыҡ тип атап булырҙай сифаттар күсһә, олатайҙың дәртлелеге, маҡсатҡа ынтылышлылығы, әүҙем тормош алып барыуы уға ла хас ине.

**Атайығыҙҙың тарих менән ҡыҙыҡһына башлауы мәктәп йылдарына тура киләме?**

- Атайым мәктәптә уҡыған йылдары хаҡында һөйләһә, иң әүәл даими рәүештә асығыуын, ярым ас көйө уҡырға йөрөүен иҫләр ине. Өфөлә 1944 йылдан бирле аталары һуғышта үлеп ҡалған етем балалар өсөн мәктәп-интернат эшләп килә, атайымдың шул мәктәптә белем алыу теләге бик көслө була. Әммә уны тәүҙә атаһы тере булғас, был мәктәпкә ҡабул итмәйҙәр. Шулай ҙа унын ошо хыялы тормошҡа аша - тырыш һәм һәләтле малайға ошо мәктәптә уҡыу мөмкинлеге бирелә. Унынсы класта уҡығанда ул тәүҙә юрист һөнәренә әйә булырға, тип ниәт итә. Әммә уны тарих уҡытыусыһы: "Һин һәйбәт тарихсы булырһың", - тип, тарих йым шулай итеп үҙенә йәшәрлек аҡса эшләй башлай. Шул уҡ ваҡытта ул тәүгә археология өлкәһе менән таныша.

Студенттарҙы элекке һалдат казармаларына урынлаштыралар, һәр бүлмәлә егермеләп кеше йәшәй. Фронттан ҡайтҡандар күп була, улар атайым һымаҡ йәш студенттарҙы ҡурсалап йөрөтә. Атайымдың студент сағында төшкән бер фотоһы бар, унын артына "Основателю ненаучного ниязовского коммунизма", тип яҙылған. Мин "Ул нимәне аңлата?" тип көләм. Ә атайым ошо яҙыуҙың ғилләһен ошолай аңлатты. Ул студенттар араһында иң ярлыларҙан һанала. Өҫтөнә кейеп йөрөргә берҙән-бер генә костюмы була. Берәй ҡыҙ менән күрешергә барырға булһа, атайымды күмәкләп кейендереп ебәрәләр - кем күлдәген, кем костюмын, кем яңыраҡ ботинкаһын биреп тора. Былар шулай итеп студент коммунаһын төҙөйҙәр, барыһы ла уртаҡ, хатта һәр көн коммуна буйынса дежурный тәғәйенләнә. Әгәр лектор студенттарҙы барлай башлаһа, лекцияға килмәгән студент урынына әлеге дежурный баҫып яуап бирә, журналға дәрес ҡалдырыусы теркәлмәй ҡала икән. Һуғыштан һуңғы совет осоро, студенттарға дисциплина яғынан ҡәтғи талаптар ҡуйыла. Ә ошо студенттар "коммунаһы"нда береһе өсөн икенсеһе яуаплы була, быны ошо замандың матур бер йолаһы итеп ҡарау фарыҙ.

Артабан атайым профессор Бадерҙың лекцияларын тыңлай, махсус ғилми баҫмаларҙы өйрәнә, унын археология менән ҡыҙыҡһыныуы артҡандан-арта

**Нияз Абдулхаҡ улын археология өлкәһенә йәлеп итеүсе тәүге остазы Отто Бадер хаҡында ниҙәр әйтер инегеҙ?**

- Нияз Абдулхаҡ улының тәүге уҡытыусыһы - күренекле совет археологы Отто Николаевич Бадер, тарих фәндәре докторы, профессор, Пермь археология мәктәбенә нигеҙ һалыусы ғалим. Ул бик күп археологик ҡомартҡыларҙы асҡан тикшеренеүсе, хатта бер Сунгирь ҡомартҡыһын өйрәнеүе генә лә үҙе ҙур асыш, тип баһалана археология фәнендә. "Бар күңелемде биләп алыусы һәм мауыҡтырғыс археология фәне сирен минә, II курс студентына, уҡытыусым Отто Николаевич Бадер "йоҡторҙо", - тип хәтерләй күп йылдар үткәс атайым. Отто Бадер сығышы менән этник немец кешеһе була, шуға күрә уны һуғыш ваҡытында Уралға хеҙмәт армияһына ебәрәләр. Унын уҡыусыһы һәм коллегаһы Владимир Генинг та Уралға шул рәүешле килеп эләгә. Ошоға тиклем күп төрлө археологик ҡомартҡыларға бай булған Кама буйҙарында, Урта һәм Көньяҡ Уралда профессиональ археологтар юҡҡа иҫәп була. Бадер һәм Генинг археологтарҙың Урал төркөмөн ойоштороусылар, уларҙың һәм уҡыусыларының тынғыһыҙ эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә Пермь, Свердловск, Һамар, Ижевск, Силәбе һәм Башҡортостан археологик мәктәптәре хасил була. Отто Бадер Өфөгә килеп йөрөнө, атайымдың фатирында туҡтала торған булды. Унын интеллигентлылығы ғалимдарҙа ғына осрай торған ошо һаҡа-

2 млн йыл - 30 мең йыл әүәл, неандерталь кешеһе бынан 300 мең йыл - 24 мең йыл әүәл, кроманьон кешеһе, йәғни Homo sapiens 40 мең йыл - 10 мең йылдар арауығында йәшәгән тәү кешеләр хаҡында мәғлүмәттәр өсөн беҙ археология фәненә бурыслыбыҙ. Шул уҡ Боронғо Мысыр (Египет), Боронғо Ҡытай, Междуречье, Ассирия, Шумер, башҡа Көнсығыш цивилизациялары хаҡында археологтарҙан башҡа ни белер инек? Археологтар боронғо ҡомартҡылар территорияларынан иң боронғо яҙмаларҙы тупраҡ, ҡом ҡатламдары аҫтынан ҡаҙып алып, тарих фәненә иҫ китмәле асыштар яһаны.

Ҡаҙыу эштәре барышында табылған керамиканы ғына алып ҡарайыҡ. Балсыҡтан яһалған һауыт-һабала мотлаҡ төрлө биҙәк-билдәләр була. Бер территорияла оҙайлы ваҡыт дауамында йәшәгән ҡәбиләләрҙең һауыт-һабаһының формалары үҙгәрә бара, ә биҙәктәре шул көйө ҡала. Биҙәктәр - боронғо дәүер кешеләренең сакраль билдәләре. Һауыт-һабала кеше һыу, аҙыҡ-түлек һаҡлай, уны аш-һыу өсөн ҡуллана. Ә сакраль биҙәктәр уларҙы төрлө сирҙәрҙән ҡурсалау ролен үтәгән, тип фараз итергә була. Йәнә ҡомартҡыларҙағы әйберҙәрҙең орнаменты ҡырҡа үҙгәрә икән, тимәк, бында икенсе бер ҡәүемдәр йәшәй башлағанын күҙалларға була. Шул уҡ көршәктәрҙе яһау өсөн ҡулланылған балсыҡтың составы бер төрлө була, урындағы ҡәбилә кешеләренә хас булған состав үҙгәрмәй. Ә башҡа составлы балсыҡтан яһалған һауыт-һаба осрай башлаһа, был уларҙың ошо территорияға сит тарафтарҙан килтерелгәнлегенә дәлил. Тимәк, ҡәбиләләр араһында сауҙа бәйләнештәре булыуы хаҡында һығымта эшләп була.

Ҡомартҡыларҙа табылған әйберҙәр комплексы, үлгәндәрҙе ерләү йолалары кинәт кенә үҙгәрә икән, был да билдәле бер фекергә дәлил була: был урынға икенсе мәҙәниәт кешеләре үтеп ингән, ә элеккеләре йә ассимиляцияға бирелгән,

***Яҙма сығанаҡтар буйынса тарихты башлыса 10 - 12 мең йыл ваҡыт арауығында ғына өйрәнеп була. Ә бына археология фәне аша беҙ кешелек донъяһының үҫеш йүнәлештәрен Homo habilis (оҫол кеше) тип аталған археологик табылдыҡтарҙан башлап беләбеҙ - улар йәшәгән дәүерҙәрҙән сама менән 2,3 - 1,5 млн йыл ваҡыт үткәне билдәле. Унан һуң Homo erectus (тура баҫып йөрөүсе кеше) 2 млн йыл - 30 мең йыл әүәл, неандерталь кешеһе бынан 300 мең йыл - 24 мең йыл әүәл, кроманьон кешеһе, йәғни Homo sapiens 40 мең йыл - 10 мең йылдар арауығында йәшәгән тәү кешеләр хаҡында мәғлүмәттәр өсөн беҙ археология фәненә бурыслыбыҙ.***

***✓ Археолог тик бер нәмәне генә бер ҡасан да аныҡ рәүештә асыҡлай алмаясаҡ - иң боронғо ҡәбиләләрҙең атамаларын һәм уларҙың ниндәй телдә аралашҡанын. Был мәсьәләне бары тик яҙма сығанаҡтар аша ғына күҙалларға була.***

# сәйәхәт,

йә башҡа тарафҡа күсеп киткән. Шулай итеп, археологик ҡаҙылмалар тикшеренеүселәргә боронғо кешеләр хаҡында байтаҡ ҡына ваҡ деталле факттарҙы туплау мөмкинлеге асыла. Тора-бара уларҙы билдәле бер логик сылбырға теҙеп анализлай алыу көтөлмәгән асыштарға нигеҙ бирә. Археолог тик бер нәмәне генә бер ҡасан да аныҡ рәүештә асыҡлай алмаясаҡ - иң боронғо ҡәбиләләрҙең атамаларын һәм уларҙың ниндәй телдә аралашҡанын. Был мәсьәләне бары тик яҙма сығанаҡтар аша ғына күҙалларға була. Шул уҡ ваҡытта археология ниндәйҙер бер этнос барлыҡҡа килгәнгә тиклем билдәле бер территорияла көн иткән ҡәбиләләрҙең матди мәҙәниәтен һәм йолаларын өйрәнеү мөмкинлеген бирә. Әлбиттә, иң боронғо кешеләрҙән хәҙерге заман этностарына тиклем килеп еткән мәҙәниәт ярсыҡтарын билдәләп була.

**Нияз Абдулхаҡ улы 1957 йылдан башлап йыл һайын археологик экспедицияларға йөрөй, ошондай ялан эштәре уның ғилми эшмәкәрлегенә төплө нигеҙ булғандыр?**

- Экспедицияларға сығып, ҡомартҡыларҙы ҡаҙып асмайынса, археологияла бер ни ҙә эшләп булмай. Йәйге экспедиция үҙе үк ғилми тикшеренеү формаһы. Атайым студент сағынан бирле ошондай ғилми экспедицияларҙа эшләп, археолог өсөн үтә мөһим булған белем һәм күнекмәләрҙе үҙләштерә. Нияз Абдулхаҡ улы - махсус белеме булған беренсе башҡорт археологы. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләгән йылдарҙа атайым май айынан уҡ барса кәрәк-яраҡтарын әҙерләп, юлға ҡуҙғала һәм көҙ еткәс кенә кире Өфөгә ҡайта. Туҡланыу мәсьәләһен дә урында хәл итәләр: унлаған һарыҡ, тауыҡтар һатып алып, кәртәләп алынған яланда тоталар. Экспедицияға байтаҡ ҡына кеше йәлеп ителә ине, ҡаҙыу эштәрендә студенттар, өлкән класс уҡыусылары ла ҡатнашты. Мин үҙем дә йәй көндәрен ошо ялан лагерында уҙғарҙым, тәүләп ошонда аяғыма баҫтым. Әсәйем дә оҙайлы отпуск алып килә торғайны.

Атайым археолог булып эшләй башлаған йылдарҙа грандиоз археологик ҡомартҡылар асылды: Бөрө ҡәберлеге, Бахмут, Торбаҫлы, башҡа шундай ҡомартҡыларҙың тотош бер ҙур ҡатламы өйрәнелә башланы. Тарихи Башҡортостандың Урта быуаттар археологияһын булдырыу - һис шикһеҙ, Нияз Абдулхаҡ улының оло ҡаҙанышы. Ул Ырымбур өлкәһендә лә ҡаҙыныу эштәрен юлға һалды, ярты йыл буйына тиерлек экспедицияла була ла, ҡалған ярты йылды ҡомартҡыларҙа табылған әйберҙәрҙе тикшереп, анализлап, ғилми хеҙмәттәр яҙҙы, археология буйынса китаптар нәшер итте. Экспедицияла булған саҡта ла, унан аҙаҡ та ғилми эҙләнеүҙәрен дауам итте, объектив анализ нигеҙендә төплө ғилми һығымталар эшләне.

**Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында, һуңынан Башҡорт дәүләт университетында эшләгән йылдарында Нияз Абдулхаҡ улы башҡорт халҡының иртә тарихы һәм этногенезы проблемаһын ентекләп өйрәнә, һөҙөмтәлә ул 1988 йылда "Южный Урал в VII-XIV вв.: данные археологии к вопросу о происхождении башкир" тигән темаға докторлыҡ диссертацияһын яҡлай. Бер аҙ ваҡыт үткәс, 1994 йылда уның һеҙҙең менән авторҙашлыҡта "История Башкортостана с древнейших времен до XVI века" тигән ҙур күләмле монографияһы баҫылып сыға. Был хеҙмәттәрҙе Нияз Абдулхаҡ улының ғилми эшмәкәрлегенең апофеозы, тип нарыҡлап булыр ине. Олуғ ғалимыбыҙ ҙур асышҡа тиңләп булырҙай һығымталарға килә: Көньяҡ Уралда б.э. тиклем һәм унан һуңғы дәүерҙәрҙә йәшәгән боронғо ҡәбиләләр һәм хәҙерге башҡорт халҡы араһында билдәле бер күсәгилешлек булыуы хаҡындағы фекерҙе Рәсәй тарихсылары иғтибарына сығара. Һеҙ ошо идеяны нисегерәк аңлатыр инегеҙ?**

- Һәр бер этностың килеп сығышы үтә ҡатмарлы проблемалар иҫәбенә инә. Тарихи процестар барса дәүерҙәрҙә тиерлек халыҡ төркөмдәренең ҙур миграцияһы менән бәйле бара. Йәмғиәттә этногенезға ҡарата ике диаметраль ҡараш йәшәй. Беренсеһе - ниндәйҙер этностың автохтон халыҡ булғанлығын, уның боронғолоғон раҫларға тырышыу. Икенсеһе - боронғо дәүерҙәрҙә ниндәйҙер территорияла билдәле бер этноним менән аталып йөрөтөлгән халыҡ йәшәүен билдәләп булмай, уның ҡайҙандыр күсеп килеп, этнос булараҡ формалашыуы, тарихи масштабтан ҡарағанда, һуңғы осорҙарҙа ғына башлана. Был фольклорҙа, легендаларҙа, эпостарҙа ла сағылыш тапҡан, шулай уҡ фәндә лә төрлө ҡараштар бар.

Башҡорт халҡының этногенезын ғилми өйрәнеү уҙған быуаттың 50-се йылдары аҙағында, 60-сы йылдары башында башлана. Өфөлә ошо проблема буйынса Бөтә Союз ғилми конференцияһы уҙғарыла, уның эшендә тарихсылар, археологтар, этнологтар, филологтар, фольклор белгестәре ҡатнаша. Ниндәйҙер һығымталар эшләр өсөн ғилми ерлек булмай, әммә тәүләп яңы мәсьәләләр ҡуйыла, бурыстар билдәләнә. Ул саҡта археология фәне Башҡортостанда яңы ғына үҫешә башлаған мәл, ә Нияз Абдулхаҡ улы археологик тикшеренеүҙәр аша башҡорт этносының сығанаҡтарын билдәләү бурысын үҙ иңенә ала. Һәм ул барса ғүмерен ошо ғилми проблеманы хәл итеүгә арнай,тип әйтергә була. Әммә тик археология факттары нигеҙендә генә был мәсьәләне сисеү мөмкин түгел, комплекслы тикшеренеүҙәр талап ителә: этнографтар, лингвистар, фольклорсылар һәм башҡа белгестәрҙе йәлеп итеү зарурлығы тыуа. Бигерәк тә билдәле булған яҙма сығанаҡтарҙа башҡорттар тураһында теркәлгән мәғлүмәттәрҙе анализлау мөһим була. Тарихсы Петр Рычковтың, этнограф Сергей Руденконың, лингвист Ж. Кейекбаевтың һәм башҡа ғалимдарҙың хеҙмәттәрен яңынан ҡарап сығыу талап ителә. Академик Раил Кузеевтың башҡорт шәжәрәләре буйынса хеҙмәттәрендә, уның "История башкирского народа" тигән монографияһында ошо юҫыҡта күп мәғлүмәттәр сағылдырылған. Нияз Абдулхаҡ улы, төбәк тарихын археология материалдары нигеҙендә өйрәнә башлағас, тарих фәнендә, этнографияла, филологик хеҙмәттәрҙә башҡорт халҡының Көньяҡ Уралға сағыштырмаса һуңғы осорҙа ғына үтеп инеүе хаҡындағы һығымтаның яңы асылған факттарға тура килмәүен билдәләй. Мәҫәлән, ҡомартҡыларҙа табылған артефакттарҙы, ҡатын-ҡыҙҙарҙың шул уҡ биҙәүестәрен, түшелдеректәрен, сәсҡаптарын ғына алып ҡарайыҡ: улар һәм башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары кейемендә әлегә тиклем һаҡланып ҡалған боронғо элементтар, деталдәр араһындағы бәйләнеш күҙгә бәрелеп тора бит.

**Эйе, Нияз Мәжитов башҡорт халҡының иртә этногенезы проблемаһына арналған хеҙмәттәрендә лингвистика, фольклор өлкәләре менән бәйле факттарға ҙур иғтибар биргән. Боронғо Башҡортостан тураһында һеҙҙең менән авторҙашлыҡта яҙылған монографияһында ул ошо факттарға ентекле анализ эшләгән...**

- Геродот яҙмаларындағы Даих - Яйыҡ, Ыҡ, сак - Суҡ, Һаҡмар (Сакмара) һәм башҡа атамалар боронғолоҡ эҙҙәрен һаҡлай. Ошондай параллелдәр комплексын ҡараһаҡ, Урта быуаттарға хас булған факттарҙы хәҙерге башҡорт этносы менән бәйләп була. Әйтергә кәрәк, Нияз Абдулхаҡ улы ошондай факттарҙы ғүмере буйына өйрәнде, тикшерҙе, төплө анализ эшләй алды. Тарих фәнендә башҡорттарҙың ата-бабаларының Урта быуаттарҙағы Көньяҡ Уралды төйәк иткән ырыу-ҡәбиләләрҙән булыуы билдәле ине. Әммә Нияз Мәжитов тарихҡа тағы ла төпкәрәк ҡараш ташлай алды: иртә тимер быуатында ошо территорияла йәшәгән ҡәбиләләр (протобашҡорттар) менән хәҙерге башҡорт этносы араһында этномәҙәни, генетик бәйләнеш булыуы объектив факттар менән раҫлана. Бронза йә иһә иртә тимер быуатында Көньяҡ Уралда йәшәүсе ҡәбилә кешеләре үҙҙәрен нисек атағандыр - быныһы билдәһеҙ. Нияз Абдулхаҡ улы башҡорттарҙың иң боронғо ата-бабаларын сак-массагет ҡәбиләләре менән бәйләй, ә уларҙың ҡасан һәм ни өсөн үҙҙәрен башҡорт этнонимы менән атай башлауын әлегә аныҡ билдәләп булмай.

Нияз Абдулхаҡ улы, алдараҡ әйтелгәнсә, ғилми эшмәкәрлегенең тәүге этабында, бронза һәм иртә тимер быуат ҡомартҡыларын өйрәнгән саҡта уҡ, ошо дәүерҙәрҙә йәшәгән ҡәбиләләр мәҙәниәте һәм хәҙерге башҡорт халҡы мәҙәниәте араһында билдәле бер бәйләнештәр, параллелдәр булыуына иғтибар итә. Шуға күрә ошо бәйләнештәрҙең ысынбарлыҡҡа тап килеүен раҫлау уның өсөн ҙур ғилми проблемаға әйләнә. Башҡорт халҡының этногенезы мәсьәләләре буйынса унан алдараҡ та айырым тикшеренеүҙәр була, әммә уларҙы комплекслы анализлау, археология материалдары менән сағыштырыу һәм дөйөмләштереү бурысы Нияз Мәжитов иңенә төшә. Һәм ул ҡуйған маҡсатына өлгәшә: ғилми хеҙмәттәрендә башҡорт халҡының этник нигеҙенең иртә тимер быуаты дәүерендә үк Көньяҡ Уралда формалаша башлауын иҫбатлаусы дәлилдәр таба. Бына бер миҫал. Донъяла үҙ эпостары булған халыҡтар артыҡ күп түгел. Эпос билдәле бер этник мөхиттә ижад ителә һәм тик шул шарттарҙа быуындан-быуынға тапшырыла килә. "Урал батыр", "Аҡбуҙат" эпостары боронғо башҡорт мөхитендә, иртә тимер быуаты осоронда хасил булған һәм, һис шикһеҙ, унда үтә боронғо замандарға ғына хас булған күренештәр, ғөрөф-ғәҙәттәр, йолалар сағылыш тапҡан. Ә археология, ҡомартҡыларҙы өйрәнеп, боронғо ҡәбиләләрҙә тап ошондай йолалар булыуын раҫлай.

Йәнә шуныһы ла хаҡ: Көньяҡ Уралға Урта һәм Үҙәк Азиянан, башҡа төбәктәрҙән миграция ағымдары өҙөлмәй, бында күсеп килеүсе ҡәбиләләр, бәлки, урындағы, ерле этник төркөмдәрҙән көслөрәк тә булғандыр. Әммә Нияз Абдулхаҡ улының бер фекерен инҡар итеп булмаясаҡ: бронза быуатынан алып иртә тимер быуатына тиклем һәм унан һуң уҙған дәүерҙәрҙә Көньяҡ Уралдың автохтон ҡәбиләләре юҡҡа сыҡмаған, улар был территорияла күп быуаттар буйына йәшәүен дауам иткән, мәҙәниәте һәм йолалары элементтарын быуындан-быуынға тапшыра килгән, ошонда хасил булған этностарҙың этногенетик нигеҙе ролен үтәгән. Әлбиттә, быуаттар дауамында барған миграция процестары барышында уларға икенсе бер ҡәүемдәр ҡушыла килгән, әммә улар үҙҙәренең тәү этник йөҙөн юғалтмай йәшәй алған, ә башҡа этник ҡатламдар ошо төп үҙәк тирәләй тупланған.



***Тарих фәнендә башҡорттарҙың ата-бабаларының Урта быуаттарҙағы Көньяҡ Уралды төйәк иткән ырыу-ҡәбиләләрҙән булыуы билдәле ине. Әммә Нияз Мәжитов тарихҡа тағы ла төпкәрәк ҡараш ташлай алды: иртә тимер быуатында ошо территорияла йәшәгән ҡәбиләләр (протобашҡорттар) менән хәҙерге башҡорт этносы араһында этномәҙәни, генетик бәйләнеш булыуы объектив факттар менән раҫлана.***

**(Дауамы 10-сы биттә).**

✓ Был ҡомартҡы бөтөн Рәсәй кимәлендәге уникаль археологик объект. Унда тарих төпкөлдәре хаҡындағы мәғлүмәттәр һаҡлана. Нияз Абдулхаҡ улы ошо ҡомартҡыны һаҡланы һәм яҡланы.



# ТАРИХ ТӨПКӨЛДӘРЕНӘ СӘЙӘХӘТ,

## йәки Ҡаҙып асылған хәҡиҡәт

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**Нияз Абдулхаҡ улы иҫән булһа, мин уға ошондай һорау менән мөрәжәғәт итер инем: "Башҡорт халҡы составына 40-тан ашыу ырыу инә. Башҡорттар әлегәсә ҡайһы ырыуҙан булғанлығын онотмай, яҙма мәғлүмәттәр, шәжәрәләр менән бер рәттән, халыҡ хәтерендә лә ырыуҙар менән бәйле риүәйәттәр йәшәй. Төрлө сығышлы булыуҙарына ҡарамаҫтан, улар барыһы ла тарих төпкөлдәренән бирле уртаҡ башҡорт этнонимын үҙ иткән. Быны ниндәйҙер бер парадокс итеп ҡабул итергә кәрәкме?"**

- Юҡ, был феноменды парадокс тип атап булмай. Башҡорттарҙа ырыу-ҡәбилә төҙөлөшөнөң оҙайлы ваҡыттар буйына ғәмәлдә булыуының үҙ сәбәптәре бар. Билдәле булыуынса, һәр ырыу һәм ҡәбилә үҙ ерендә, үҙ биләмәләрендә йәшәй. Хатта малсылыҡ менән шөғөлләнгән күскенсе ҡәүемдәрҙең дә бер урындан икенсеһенә күсеп йөрөй торған билдәле территориялары булған. Шул уҡ Әйле ҡәбиләһе Арал буйы далаларынан Көньяҡ Уралға тиклем мал көтөүҙәре менән күсеп йөрөй алған. Һәр айырым ырыу үҙ ерендә эске тормошон үҙаллы алып барған. Әммә, мәҫәлән, оло яуҙар ҡупҡан мәлдә бөтөн ырыуҙар бер уртаҡ исем аҫтында дошмандарына ҡаршы сыҡҡан. Бына шул уҡ төрки империяһы составында төрлө сығышлы ырыуҙар була, әммә уларҙың ғәскәрендә барыһы ла төрөк (тюрк) этнонимы менән атала. Тимәк, беҙҙең башҡорт этнонимының да тап хәрби-сәйәси сәбәптәр арҡаһында нығыныуы хаҡында фараз итергә була. Йәнә, дәүләттәр барлыҡҡа килгәс, халыҡтан яһаҡ йә иһә һалым йыйыу шулай уҡ ырыу-ҡәбилә төҙөлөшөнә ярашлы ойошторола.

**Беҙҙең бәгзе зыялыларыбыҙ башҡорт этносында күскенселәр компоненты булмаған, тип фараз итә. Ни өсөндөр күскенсе төшөнсәһенә негатив ҡараш барлыҡҡа килгән. Ошо хаҡта ни әйтер инегеҙ?**

- Тарихи күҙлектән ҡарағанда, күскенселәр Евразия далаларында бик позитив роль уйнаған. Бер урындан икенсеһенә күсеп йөрөүсе ҡәүемдәр быға тиклем бер-береһенән алыҫ арауыҡтарҙа айырымланып көн иткән халыҡтар араһында бәйләнеш булдыра, уларҙың берләшеүенә, тупланыуына юл аса. Күсеп йөрөү барышында айырым ҡәбиләләрҙең матди мәҙәниәте, йолалары, башҡа ҡаҙаныштары икенсе ҡәүемдәр тарафынан үҙләштерелә. Бөйөк дала интеграцияһы процестары күсмә ҡәбиләләр хәрәкәтенән башлана. Аттарҙа һыбай йөрөй башлау, тәгәрмәсле арбалар уйлап табыу һәм уларҙы киң ҡулланыу йыраҡ араларға күсеп йөрөү мөмкинлеген бирә. Сауҙа итеү өсөн уңайлы шарттар барлыҡҡа килә, шәхси милексәлек хасил була. Дала кешеһенең туҡланыу сығанағы - малсылыҡ, ул аҡһым бирә. Әммә кеше организмына углеводлы ризыҡтар, шул уҡ икмәк, йәшелсә-емештәр кәрәк. Уларҙы табыуҙың ике юлы бар: сауҙа итеү һәм баҫып алыу.

Шуға күрә сауҙагәрҙәрҙән башҡа яугирлыҡ менән көн иткән күскенселәр ҡатламы үҫешә. Ҡәбилә өсөн яңы биләмәләр яулап алына, һуғышсанлыҡ, агрессивлыҡ арта. Күскенселәр йәмғиәтенең ошо юҫыҡта үҫешеүе Евразия далаларында ҡеүәтле империялар төҙөү өсөн төп шарт булып тора: һундар империяһы, Төрки ҡағанаттары шулай хасил була. Күсмә халыҡтар бик ҡеүәтле һәм бай дәүләттәр төҙөүгә өлгәшә - уларҙың вариҫтары булыу һис тә яҙыҡ түгел. Унан һуң, даланың бер ҡәүеме лә тулыһынса күсмә тормошта йәшәмәй - улар йыл әйләнәһенә даими күсенеп йәшәмәгән. Азия далалары ҡыштары ҡарлы була, ҡар ҡатламы 40 сантиметрҙан да ашып китә, ҡар өҫтөн ҡайырсаҡ ҡаплаһа, мал ҡыу үләнде тибенеп ашай алмай. Шуға күрә бәгзе ҡәбиләләр тауҙар араһына (Алтайға, Уралға), икенселәре көньяҡҡа табан күсеп китергә мәжбүр була. Ҡыш үтеү менән улар үләнле далаларға кире ҡайта. Саф күскенселәр Эске Монголияла ғына йәшәгән - ул зонала антициклондар өҫтөнлөк итә, яуым-төшөм дә наҡыҫ булғас, даими күсеп йөрөүҙән башҡа әмәл ҡалмай.

Башҡорттарға килгәндә, Алтын Урҙа осорондағы хандар, шул уҡ Ноғай хандары уларҙың боронғо көтөүлек ерҙәренә юлды бөтөнләйгә яба. Малсылыҡ менән көн күргән башҡорттарҙың хәле ауырлаша. Уларҙың байтағы Көньяҡ Уралдың таулы-урманлы зонаһына күсеп китергә мәжбүр була. Ә тау-урман зонаһы башҡорттары бер ҡасан да күсмә тормошта йәшәмәгән. Бында һунарсылыҡ, ҡортсолоҡ, мәғдән сығарыу, металл иретеү менән шөғөлләнгәндәр. Ә малдарын йәйләүгә сығарыу - уларҙың быуаттар буйына күнегелгән тормош рәүеше, быны бер нисек тә күскенселек менән бәйләп булмай.

Күскенселеккә кире ҡараш Себер тарафтарына тиклем барып йөрөгән рус сауҙагәрҙәре, Мәскәү батшалары ойошторған экспедицияларҙа ҡатнашҡан хәрбиҙәр биргән мәғлүмәттәр һөҙөмтәһендә таралып китә. Улар элегерәк етеш тормошта көн иткән дала кешеләренең бөлгөнлөккә, хатта хәйерселеккә төшөүен теркәп ҡалдырған, ошо ҡәүемдәрҙе ҡырағайҙар итеп һүрәтләгән. Ҡаҙаҡ яҙыусыһы һәм әҙәбиәт белгесе Олжас Сөләймәнов совет осоронда тәү башлап күскенселәр тип нарыҡланған төрки донъяһының боронғо цивилизация булыуы, боронғо төрки теленең башҡа телдәргә йоғонтоһо хаҡында ғилми-популяр әҫәрҙәр яҙа. Әйтергә кәрәк, әлеге ваҡытта күсмә ҡәүемдәр тарихын фәндә лә ҡайтанан ҡарау идеяһы ҡабул ителде, был элекке хата ҡараштарҙан арыныу мөмкинлеген бирә.




*Сауҙагәрҙәрҙән башҡа яугирлыҡ менән көн иткән күскенселәр ҡатламы үҫешә. Ҡәбилә өсөн яңы биләмәләр яулап алына, һуғышсанлыҡ, агрессивлыҡ арта. Күскенселәр йәмғиәтенең ошо юҫыҡта үҫешеүе Евразия далаларында ҡеүәтле империялар төҙөү өсөн төп шарт булып тора: һундар империяһы, Төрки ҡағанаттары шулай хасил була. Күсмә халыҡтар бик ҡеүәтле һәм бай дәүләттәр төҙөүгә өлгәшә - уларҙың вариҫтары булыу һис тә яҙыҡ түгел.*

**Нияз Абдулхаҡ улы "Өфө-II" ҡаласығында бик ентекле археологик тикшеренеүҙәр ойоштороп, ошо урында оҙайлы ваҡыт дауамында "Башҡорт" тигән ҙур ҡала булыуы хаҡында һығымта эшләне. Ошо фаразды ҡабул итергә теләмәүсе ғалим-ғәләмә уның нигеҙле фекерҙәрен тәнҡитләп тә сыҡҡайны. Ошо турала әйтеп китһәгеҙ ине.**

- Беҙҙең эраның I мең йыллығы урталарында Көньяҡ Уралда бахмут мәҙәниәтенә ҡараған ҡәбиләләр йәшәй, уларҙың фин-угыр сығышлы булыуы фараз ителә. Артабан уларҙы торбаслы мәҙәниәте ҡәбиләләре буйһондороп, V - VII быуаттар арауығында ошо территорияла йәшәй ("Өфө-II" ҡаласығы, Яңы Торбаслы, Дежнев ҡурғандары, Шәрәй, Кушнаренко ҡәберлектәре, Имәндәш ҡаласығы һ.б.). Торбаслыларҙың йә угыр, йә иһә сармат/алан сығышлы булыуы хаҡында фараздар бар. Нияз Мәжитов ғилми әҙәбиәттә уларҙың башҡорт этносы формалашыуында ҡатнашыуы хаҡында яҙып сыкты.

Өҫтөнлөк алған ҡәбиләгә урындағы ҡәүем төркөмдәре менән идара итеү һәм ситтән килгән ҡәбиләләрҙең һөжүменән һаҡланыу өсөн нығытылған үҙәк кәрәк була. "Өфө-II" ҡаласығы тап ошондай нығытма рәүешендә барлыҡҡа килә. Бында этник сығышы яғынан бер-береһенән айырылып торған кешеләр йәшәй: бахмут, торбаслы, кушнаренко мәҙәниәтенә ҡараған табылдыҡ-артефакттар ошо хаҡта һөйләй. Торлаҡ конструкциялары ла төрлөсә: сыбыҡ өҫтөнә балсыҡ һыланып яһалғандары менән бер рәттән (былдай балсыҡ өйҙәр Көньяҡ Уралға хас түгел), ярым ер өйҙәр һәм ағастан буралған өйҙәр ҙә була был ҡаласыҡта. Өйҙәр бер-береһенә терәлеп тигәндәй тора, ҡаласыҡ буй һәм арҡыры урамдарҙан торған кварталдарҙан хасил була. Керамика өлгөләре, биҙәүестәр ҙә төрлө-төрлө. Көньяҡ далаларына илтеүсе ҡоро юлдар һәм Ағиҙел-Кама-Волга һыу юлы сауҙа алып барыу өсөн бик уңайлы була, сит ерҙәрҙән килтерелгән балсыҡ һауыт-һаба ярсыҡтарының күп булыуы ошоға дәлил. Көньяҡ Уралда элегерәк булмаған ишәк һәм дөйә һөйәктәре лә табылды. Бында ҙур сауҙа үҙәге - фактория хасил булған. Антропологтар хайуан һөйәктәренең ныҡ ватылған, сәрпәкләнгән булыуына иғтибар итте - тимәк, туҡланыу өсөн ит етешмәгән. Бында һатыуға сығара алырлыҡ тауар етештереүсе һөнәрселәр күп була. Нығытма стеналарынан ситтәрәк тә халыҡ йәшәгән торлаҡ урындары табылды, археологтар уны "Өфө-III" тип атай. Унда (посадта) йәшәүселәр ҡала халҡын аҙыҡ-түлек менән тәьмин итә. Ғөмүмән, Өфө ярымутрауының буйынан-буйына, 10 саҡрым арауыҡта кешеләр йәшәгән торлаҡтар була, уларҙың барыһының бергә Меркатор картаһындағы һәм Каталон атласындағы Паскерти ҡалаһы булыуын күҙаллап була. Нияз Абдулхаҡ улы билдәләүенсә, был ҡала беҙҙең эраның IV быуаты аҙаҡтарынан - V быуатынан XVI быуатҡа тиклем йәшәй. Ҡыҙғаныс, V - IX быуаттарға ҡараған мәҙәни ҡатламдар ғына һаҡланып ҡалған, ҡалғандары күп йылдар дауамында барған төҙөлөш барышында юҡҡа сыҡҡан, әммә ошо һуңғараҡ осорға ҡараған айырым предметтар осрай. Мәҫәлән, Алтын Урҙа осорона ҡараған 19 тәңкә (монета) табылды. Хәҙерге Опера һәм балет театры, медицина университеты, Аҡ йорт биләгән арауыҡта ғәҙәттән тыш ҙур некрополь булған. Ҡайһы бер мәғлүмәттәргә ярашлы, Өфө дворяндары яңы ҡаланы төҙөү барышында табылған 2,5 кг ауырлығындағы ҡиммәтле биҙәүестәрҙе, алтындан ҡойолған әйберҙәрҙе Екатерина II бүләк иткән. Был хазинаның яҙмышы билдәһеҙ.

**"Өфө-II" ҡаласығын киләсәк быуындар өсөн һаҡлап алып ҡалыу зарурлығы булды һәм әле лә бар…**

- Был ҡомартҡы бөтөн Рәсәй кимәлендәге уникаль археологик объект. Унда тарих төпкөлдәре хаҡындағы мәғлүмәттәр һаҡлана. Нияз Абдулхаҡ улы ошо ҡомартҡыны һаҡланы һәм яҡланы. Ошо ҙур булмаған майҙанға ҡул тейҙерергә лә ярамай, хатта археологтарға ла. Был эште киләсәккә ҡалдырайыҡ. Ғөмүмән, әлеге ваҡытта барса тарихи ҡомартҡыларҙы ла һаҡлауҙы дәүләт кимәлендәге бурыс, тип ҡабул итеү фарыз.

**ШУЛАЙ ИТЕП…**

**Археологик ҡомартҡылар материалдары нигеҙендә тарихи ысынбарлыҡты тергеҙеп, башҡорт халҡының боронғо тарихы буйынса уникаль асыштар авторы булған Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитов үҙ-үҙенә рухи һәйкәл һалып ҡалдырған олуғ шәхестәрҙең береһе ине. Уның ғилми эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә тарих фәненең өр-яңы биттәре асылды, олуғ тарихсыбыҙ ҡалдырған ғилми мираҫтың киләсәк быуындарға барып етәсәге хаҡында һис бер икеләнеүһеҙ әйтергә була.**

**Вәлиәхмәт БӘЗРЕТДИНОВ
әңгәмә ҡорҙо.**

**✓ Кавалерияла ҡупшы ат борон-борондан үҙ-ара дәғүә сығанағы. Бында һинең баһаңды атланып йөрөгән атыңа ҡарап билдәләйҙәр. Атың күркәм булһа, һиңә ихтирам да, хөрмәт тә бар.**




## IX

Кавалерия училищеһы бинаһы, хужалыҡ блоктары, ат һарайҙары, манежы ла бөтә ҡыҙыл кавалерияға үрнәк булырлыҡ итеп йыһазландырылған. Училищеның начальнигы - граждандар һуғышы осоронда атаҡлы Беренсе атлы армияла эскадрон командиры булып хеҙмәт иткән, атлы ғәскәрҙәрҙә исеме киң таралған, Ставрополь казагы генерал-майор Вербицкий ине. Генералдың ат йөнлө кеше икәнен күптән белгән майор Пустовой Әүхәҙизе ике-өс көн ашатып тәрбиә итте лә училище начальнигына күрһәтергә теләп манежға алып сыҡты. Аттың генерал күңеленә хуш килеүенә уның бер ҙә шиге юҡ ине.

Вербицкий учениеларҙы өлгөлө үткәргәне өсөн Әрмән компартияһының Үҙәк Комитеты бүләк иткән Баликджан[1] исемле аҡ күк айғырына атланып түгел, "Эмка" машинаһына ултырып килде. Билдәле, генерал ат ҡарарға сыҡҡас, башҡа командирҙар ҙа ҡалмай. Штаб начальнигы полковник Поддубный ҙа кабинетында нисек ултырһын? Ҡул ҡуяһы ҡағыҙҙарын тиҙ генә йыйыштырып йәшерен бүлексәгә тапшырҙы ла начальнигы артынан урамға сыҡты. Әүхәҙи тигән ат Вербицкий күңеленә хуш килһә, Поддубныйҙың күптән эсен көтөрләтеп йөрөгән аҡ күк Баликджан үҙенә ҡала ла баһа! Бер үҙе өс атҡа атланып йөрөмәҫ бит инде! "Уға училище начальнигының аты кусһә, үҙенең донсағы Аскетты миңә ҡалдырмай кемгә бирһен?" - тип уйлай штаб оператив бүлексәһе начальнигы майор Изотов.

Кавалерияла ҡупшы ат борон-борондан үҙ-ара дәғүә сығанағы. Бында һинең баһаңды атланып йөрөгән атыңа ҡарап билдәләйҙәр. Атың күркәм булһа, һиңә ихтирам да, хөрмәт тә бар. Мәгәр инде аҫтыңдағы атың бер баҡтаһын да ҡоймаған үжәт хайуан икән, теләһә ниндәй алтындай кеше самауыр еҙенә әйләнә. Хатта кавалерия часында хеҙмәт иткән командирҙарҙың ҡайһы саҡта ғаилә ныҡлығы ла ирҙең ниндәй атҡа атланып йөрөүе менән бәйле. Командир ҡатындары частағы бөтә яҡшы аттарҙы исемләп белә. Һүҙ араһында шуны ла әйтеп китәйем: командир ҡатындары, балалары - часта үткәрелгән ат спорты ярышының иң актив тамашасылары. Ҡайһы берҙә бисәләре, судья ҡуйған очкоға риза булмайынса, ярышта ҡатнашҡан ирҙәрен яҡлап үҙ-ара талашыуға, илашыуға тиклем барып етә.

Бына ни өсөн начальниктың бөгөн манежға ат ҡарарға килеү теләге бөтә кавалерия училищеһының командирҙарын ҡуҙғытты. Ҡулына ғәҙәттәге шыйыҡ сыбығын тотоп, өҫтөнә һылап ҡуйғандай, килешеп торған ор-яңы мундирын кейеп машинаһынан килеп төшкәс тә, манежда йыйылған командирҙарҙы күреп, генерал аптырабыраҡ та ҡалды. Уға килеп рапорт биргән майор Пустовойға:

- Бында ниндәй командирҙар йыйылышы? Уны кем тәғәйенләгән? - тип һораны. Әммә тауышына ни тиклем генә ҡатылыҡ билдәһе ҡушып ҡуйырға тырышмаһын, ирендәренә, көлөп торған күҙҙәренә ҡарап быныӊ тик яһалма ғына ҡәтғилек икәнен барыһы ла аңланы.

- Ҡайҙа, теге ҡанатлы дөлдөлөгөҙҙө күрһәтегеҙ әле, ниндәй мал икән? - тип генерал бәйле торған ат яғына йүнәлде.

- Рәхим итегеҙ, иптәш генерал! - Пустовой алдан төштө. Әүхәҙи үҙенә яҡынлашҡан ят кешеләрҙе күргәс, йәшкелт күҙҙәрен тәгәрәтеп алды ла көслө муйынын дуға һымаҡ бөгөп башын өҫкә сөйҙө, нуҡта чумбурын өҙөргә маташты. Ә быны алдан һиҙенгән Пустовой чумбурға өҫтәп нуҡта дуңгәләгенә тимер сынйыр ҙа бәйләп ҡуйғайны. Әүхәҙи башын ергә эйеп, дүрт аяғын бөрә баҫты ла бар көсөнән чумбурға аҫылынды.

- Был ат түгел, ысын йыртҡыс! - тине тәжрибәле генерал. - Бер ҡулда яҡшы итеп өйрәтеп алғанда быныӊ менән спортта ла, сабыш буйынса ла рекордтар ҡуйырға була. Ғөмүмән, ат шәп. Башҡорт аты булыуға ҡарамаҫтан, уларҙан байтаҡ бейек, буйы оҙон, һомғол, тимәк, йөрәк ат. Алғы бәкәлдәре нәҙек, ҡоро, тояҡтары текә, йомро - саптарҙар тоҡомонан. Промерҙары классик аттарҙыҡынан бер ҙә ҡайтыш түгел, - тип бөтә кеше ишетерлек итеп үҙ-үҙе менән һөйләшеп алды.

Бер аҙ торғас, теҙгенен бушатҡан атҡа тағы ҡараны:

- Шулай ҙа был дөлдөл минең өсөн түгел. Был атҡа атланырға йәшем үткән инде минең. Бәлки, берәй йәшерәк кеше өйрәтергә тотонор, - тип үҙ командирҙарына һорау менән ҡараны. Ләкин бәйле көйөнсә лә теләһә ниндәй сит кеше өҫтөнә ташланырға торған өйөр айғырына атланырға теләп алға аҙым атлаған берәү ҙә табылманы. Генерал яҡты хыял менән манежға йыйылған командирҙарының өмөтөн өҙөп ҡайтып китте. Ошонан һуң Әүхәҙиҙе ат һарайына яптылар ҙа бөтөнләй унан төңөлдөләр.

Ошо ваҡиғанан күп ваҡыт та үтмәне ат һарайының бер башындағы тренер бүлмәһенең ишеген шаҡыныылар. Эстән: "Инегеҙ!" - тигән көр тауыш ишетелде. Әкрен генә асылған ишектән яуырын, киң яңаҡлы бите көнгә янған, ҡыҫығыраҡ, ләкин үткер күҙле бер ҡыҙылармеец килеп инде лә, ҡапыл аптырап аҫтан өҫкә ҡараш атҡан майорға:

- Һеҙгә ремонт эскадроны ҡыҙылармеецы Яуымбаев мөрәжәғәт итә, - тип һүҙ башланы.

- Йә, йә, иптәш ҡыҙылармеец, йомошоғоҙҙо һөйләп бирегеҙ, - тип майор өҫтәл артына уңайлаңҡырап ултырҙы ла, - "вольно!", - тип өҫтәп ҡуйҙы. Һап-һары итеп йыуылған иҙәндә үҙенең бысраҡ аяҡтарын ҡайҙа ҡуйырға белмәй алмашлап баҫып торған Ғилмишәриф, башта ыҡ-мығыраҡ итте лә һуңынан һүҙен шыма ғына теҙеп алып китте. Ул һис бер нәмәнән дә шикләнеп тормай:

- Минең көтөү көткәндә менеп йөрөгән колхоз айғырын беҙҙең старшина бына ошонда оҙатҡан булырға кәрәк, - тип туп-тура һүҙ башланы. Ә үҙе, әйтерһең дә, айғырҙың ҡайһы денникта тороуын да алдан белгән шикелле, бармағы менән төртөп һарайҙың ат торған икенсе осона күрһәтте.

- Йә, йә, бик ҡыҙыҡ. Ул ниндәй айғыр? Ғөмүмән, был ни тигән һүҙ? "Колхоз айғыры, мин менеп йөрөгән ат!" Ҡыҙыл Армияға алынған бөтә айғырҙарҙы ла ҡасандыр, кемдер менеп йөрөгән, ә хәҙер улар кемгә ҡушыла, шулар менә. Һеҙгә аңлашыламы?

- Аңлашыла.

- Шулай булғас, шуның менән әңгәмә тамам, - тип майор урынынан тора ла башланы, һүҙҙең ошо рәүешле бөтөүен көтмәгән Ғилмишәриф, үҙ ҡарашын ҡайҙалыр ситкә төбәп:

- Иптәш майор, ул атты күпме генә яфалаһағыҙ ҙа уға атланып йөрөргә минән башҡа бер кемдең дә ҡулынан килмәйәсәк. Минең һуңғы һүҙем шул, - тине лә Ғилмишәриф ҡулын козырек аҫтына алып, китергә рөхсәт һораны. Боролоп сығып китергә әҙерләнгән ҡыҙылармеецтың киң арҡаһына бер ҡараш атты ла майор:

- Туҡта әле, әҙерәк сабыр ит, - тип сөйҙә элеүле торған ҡамсыны ҡулына алып итегенең ҡуңысына бер нисә тапҡыр шапылдатып һуҡты. Берәр нәмәгә икеләнгәндә уның электән дә шулай итек ҡуңысына һуҡҡылап ала торған ғәҙәте бар ине. Ишек төбөндә туҡтап ҡалған Ғилмишәрифтән:

- Йә, ул ат тураһында ниҙәр беләһең?, - тип һораны. Әҙерәк йәнләнә төшкән Ғилмишәриф яуап урынына:

- Барыһын да, - тип кенә ҡуйҙы.

- Йә, һөйләп ебәр, - тип Ғилмишәрифте алдына ултыртты ла, имтихан алған укытыусы шикелле, уны тыңларға әҙерләнде. Эстән әҫәрләнеп, күңеле ашҡынған Ғилмишәриф:

- Айғырҙың исеме Әүхәҙи, 1935 йылдың 25 апрелендә тыуған, - тип ҡабаланып урыҫ һүҙҙәрен бутай-бутай һөйләй башлағайны, майор уны ҡапыл туҡтатты ла:

- Иптәш ҡыҙылармеец, әгәр беҙ уны һиңә күрһәтһәк, ул һине танырмы? - тип һорауы булды, Ғилмишәриф ҡапыл ике усынан төрөпкә яһаны ла иренәнә терәп бөтә һарайҙы яңғыратып: "Әүхәҙи!" - тип ҡыҫҡырҙы. Ат һарайының теге башында сыңғырлатып кешнәгән тауыш ишетелде. Шатлығын йәшерә алмаған майор, ишекте асты ла:

- Рәхим ит, иптәш ҡыҙылармеец, - тип Әүхәҙи торған денниктың ишеген күрһәтте. Ғилмишәриф йүгереп килеп денниктың ишеген асты ла Әүхәҙизең муйынына ташланды. Ҡыуанысынан ирендәрен дерелдәтеп ирҡә генә кешнәү тауышы сығарҙы ла Әүхәҙи, элекке үҙ көтөүсеһенең ҡояшҡа ҡарайып янған тоҙло битен яланы. Ат менән кеше башҡа бер ҡасан да айырылмаҫҡа һүҙ биргән төҫлө ҡосаҡлашып ҡына торҙолар. "Ҡыҙыл Ялан" колхозының өйөр айғыры Әүхәҙи оло һынауҙар, ғазаплы яраланыуҙар үтеп үҙенең элекке хужаһын эҙләп тапты, инде башҡа мәңге айырылмаҫҡа табышты улар.

Майор Пустовойҙың икенсе көн Вербицкийға инеп, хәлде аңлатып, ҡыҙылармеец Яуымбаевты ремонт эскадронынан училищеға үҙенә тренерлыҡҡа өйрәнсек итеп күсереүен һорауҙан башҡа әмәле ҡалманы. Бер нисә көн үткәс, күңеле тынысланып, ашай-эсә башлаған, инде хәҙер йөндәре ҡояшҡа ялтырап торған бурыл айғырҙы Ғилмишәриф манежға сығарҙы. Эйәрле атына, әйтерһең дә, ул ҡулынан ысҡынып ҡасып бара, һырынған Ғилмишәрифтән майор ҡоро ғына һорап ҡуйҙы:

- Һин үҙең һәм атың ниндәй әҙерлек үткән?

- Был ат колхозда "Ворошиловса һыбайлылар" программаһын үтте, ә мин инде ремонт эскадронында "Кавалеристың тәүге хәрби әҙерлек" кимәлендә күнекмәләр өйрәндем.

Майор Пустовой ат менән бер йәнгә әйләнгән, шатлығынан битендә яҡты нурҙар балҡыған Ғилмишәрифкә бер аҙ ҡарап торҙо ла:

- Йә, әйт әле, иптәш ҡыҙылармеец, манежға сменаны[2] сығарғанда аттарҙы Устав буйынса ни рәүешле теҙергә тейешбеҙ? - тип һораны. Эскадронда тәүге ат күнекмәләре алған Ғилмишәриф бик аптырап ҡалманы.

- Трензель[3] аҫтынан ат тотоп торған кеше менән икенсе йәнәш ат араһында аралыҡ ике метрҙан да кәм булырға тейеш түгел. Был яҡын торған аттар бер-береһе менән тибешмәһен өсөн шулай эшләнелә.

Яуабына ризалығын белдереп, тренерҙың башын һелкеп торғанын күргәс:

- Ә манежда аллюр[4] башлағанда иң алға айғырҙы, унан аттарҙы, ә иң арттан бейәләрҙе ҡуябыҙ, - тип өҫтәп ҡуйҙы.

- Ә һуң нишләп смена йөрөшөн манежда айғыр башлай?

Ғилмишәриф әҙәпле генә көлөмһөрәне лә:

- Айғыр булған өсөн ул манеждағы хәрәкәтте алдан башларға тейеш, шуныһы айғыр алдында торған ат менән талаша башлай, - тине. Тамам күңеле бөткән тренерҙың:

- Атҡа мен! - тип команда биреүе булды, Ғилмишәриф, ҡанатлы ҡош кеүек, Әүхәҙизең һыртына менеп тә ултырҙы. Байтаҡтан бирле атланмау сәбәпле, эйәрләүҙә һәм атланыуҙы онота ла башлаған айғыр бер урында тыпырсынып алды. Ләкин өҫтөндә таныш кешенең ултырыуын белеп, ул башын ташлай-ташлай команда көттө. Тренерҙың манежға, әйтерһең дә, бөтә училище сыҡҡан, көр тауышлы командаһы яңғыраны.

- Смена, по головному номеру, дистанция две лошади, ездой налево шагом ма-..-р..-ш!

Йөрәгә ярһыған Әүхәҙи сызамай юртыуға күсергә самаланы, ләкин Ғилмишәриф уға эйелеп ҡолағына низер шыбырлаған төҫлө итте лә, уның башын тартты. Әүхәҙи тиҙ генә тынысланалманы. Манежды урталағас, тренерҙың икенсе командаһы ишетелде. "Строевой рысью ма-рш!" Әүхәҙи тренерҙың шул командаһын ғына көткән шикелле, еңелсә юртыуға күсте. Ә инде Ғилмишәриф шенкелдарын[5] ҡыҫып, ҡулына тотҡан теҙгенен бушатты. Ғилмишәрифтән үҙен-үҙе онотоп ҡапыл артын эйәр өҫтөндә яңылыш һуғып алғанын күреп ҡалған тренер яңынан ҡыҫҡырҙы:

- Облегчайся под внутреннюю левую ногу! - Быныһы инде Әүхәҙи алғы һул аяғын күтәргән моментта ғына эйәр өҫтөндә күтәрел, ә ергә баҫҡанда эйәргә лыпын ултыр, - тигәндә аңлата ине. Шунан һуң Әүхәҙизе тренерҙың командаһы менән Ғилмишәриф строевой, йәғни иң шәп, юртыуға күсерҙе. Тренерҙың бөгөнгө занятиеһы Әүхәҙиҙе атланған Ғилмишәрифтең ҡаҡ, тигеҙ манежды шаңҡытып, кавалеристар телендә "гладкие скачки" тип аталған йәнфарман сабыуы менән тамамланды. Сәғәтенә ҡарап торған тренер ярһыған атынан һикереп төшкән Ғилмишәриф арҡаһынан ҡағып:

- Һуңғы ике йөҙ метр аралыҡта һинең атың сәғәтенә 65 километр тиҙлек менән үтте, беренсе көн өсөн бик юғары һөҙөмтә, - тип маҡтап ҡуйҙы.

**(Дауамы. Башы 29-35-се һандарҙа).**

*[1] Баликджан - ҡәҙерле бала, малай.*
*[2] Сменаны - манежға уйнатыу өсөн сығарылған аттар төркөмөн смена тип атайҙар.*
*[3] Трензель - ат ауыҙлығының осо беркетелгән тимер дүңгәләк.*
*[4] Аттың беренсе аҙымынан алып сабыуға тиклем хәрәкәтен аллюр*
*[5] Төҙ быуынынан алып аяҡ табанына тиклем кавалеристың ат ҡабырғаһын ҡыҫып торған аяҡ аралары шенкель тип атала.*

ИНТЕРНЕТТАН



# АШЫҢ ФАЙҘАЛЫ БУЛҺЫН

■ Еләк сәләмәтлек өсөн бик файҙалы, ул когнитив функцияларҙы яҡшырта, ҡан баҫымын төшөрә - ғалимдар ошондай фекергә килгән. Эксперимент барышында унда ҡатнашыусылар 8 аҙна буйына көн һайын 2 порция баҡса еләге ашаған. Уларҙың барыһында ла яңы мәғлүмәтте ҡабул итеү һәм аңлау сифаты күтәрелгән, юғары ҡан баҫымы менән яфаланыусыларҙың ҡан баҫымы нормаға килгән, етмәһә, ҡартайыу процестары ла яйланған. Бил дә нәҙегәйеп ҡалған. Тикшеренеүҙәрҙең авторы Ширин Хушманд билдәләүенсә, был эксперимент йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары хәүефен, мәҫәлән, гипертонияны юҡҡа сығара. Баҡса еләгендә биологик әүҙем матдәләр күп, ул организмды С витамины менән дә тәьмин итә.

■ Рәсәйҙә "зыянлы ризыҡ" тигән маркировка индерергә уйлайҙар. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау йәмғиәте тәҡдиме менән быйдай ризыҡтарға тоҙлап, ферментациялап, ыҫлап һаҡланған ит продукттары - ветчина, бекон, сосиска һ.б; татлы газлы эсемлектәр, энергетик эсемлектәр; майҙа ҡыҙҙырылған әйберҙәр - бәлештәр, фри картуфы, гамбургерҙар; гриль йәки асыҡ утта бешерелгән ит инә. Былдай тәҡдим индереүгә халыҡтың нығ һимерә башлауы сәбәпсе булып тора. Хәҙер һимереүҙе лә туберкулез, шәкәр диабеты, ВИЧ, яман шеш кеүек социаль йәһәттән мөһим ауырыуҙар төркөмөнә индерергә тәҡдим итәләр. Тәмәке ҡабына уның зарары һәм ниндәй сирҙәргә килтереүен яҙып ҡуйған кеүек, былдай ризыҡтарҙың ҡаптарына ла ошондай мәғлүмәт теркәлергә тейеш, тип иҫәпләй белгестәр. Ошо рәүешле кеше үҙенең сәләмәтлеген ҡайғырта башлауы ла ихтимал, тиген өмөт табиптарҙы былдай тәҡдим менән сығыш яһарға этәргән дә инде. Инициативаны РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы эргәһендәге Йәмғиәт советында хуплағандар ҙа инде. Роспотребнадзор 2018 йылда уҡ былдай эксперимент эшләп ҡараған, әммә бизнес хужалары тарафынан яҡлау тапмаған.

■ Балалар һәм үҫмерҙәр шәкәрҙе көндәлек нормаһынан күберәк ҡуллана. Төрлө емеш-еләк һуттарында организм өсөн кәрәкле матдәләр булһа ла, уларҙың бөгөнгө заман кешеһенең сәләмәтлегенә зыяны ла бар. Мәҫәлән, уларҙа шәкәр күп, шуға ла балаларға һәм үҫмерҙәргә күпләп һут эсеү диабет, һимереү хәүефе менән янай. Статистика күрһәтеүенсә, 11-19 йәшлек балалар һәм үҫмерҙәр ҡулланған шәкәр норманан 42 процентка артыҡыраҡ. Төп шәкәр сығанағы булып емеш һуттары, татлы газлы эсемлектәр, печенье, пирожныйҙар тора. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы иҫәргә: көнөнә 6 балғалаҡтан артыҡ шәкәр ашарға ярамай.

■ Ҡояш нурҙары тәьҫире һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән D витамины сәләмәтлек өсөн мөһим. Швеция ғалимдары билдәләүенсә, ҡояшта йөрөү ҡояштан ҡасып бүлмәлә ултырыуға ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ. Каролинск институты белгестәре 20 йыл дауамында үткәргән тикшеренеүҙәренә таянып, түбәндәге һығымтаға килгән. Ҡояшта булырға яратмаусылар араһында үлем күрһәткесе ике тапҡырға юғары булып сыҡҡан. Ғалимдар аңлатыуынса, D витамины ҡытлығы сәләмәтлеккә насар йоғонто яһай.

РУХИӘТЕБЕҘ

# УНАР ҒЫНА ҺУМЛЫҠ, АЙ, УН АҠЫҠ...

**Башҡорттар борон-борондан Урал тауының ҡаҙылма байлыҡтарын, аҫылташтарҙы киң ҡулланған. Таштарҙы, гәҙәттә, биҙәү әйберҙәре сифатында файҙаланғандар.**

Башҡорттар, айырыуса, **аҡыҡ** ташын яратҡан. Урыҫ телендә ул сердолик тип атала. Аҡыҡ ҡыҙыл йәки ҡыҙғылт һары төҫтәге аҫыл таш. Уны боронғо вулкан процестары һөҙөмтәһендә, йәғни лаваның ҡыуығында, ирегән таштарҙың ҡушылмаһынан барлыҡҡа килгән, тиҙәр.

Башҡорттарға аҡыҡты ҡулланыу йолаһы Ислам дине менән килеп ингән. Сөнки аҡыҡтың ғәрәп-фарсы һүҙе булыуы ла ошоға ишаралай. Аҡыҡ борон-борондан мосолмандарҙың яратҡан ташы һанала. Мөхәммәт бәйғәмбәр уң ҡулының сәтәкәй бармағында аҡыҡ ҡашлы йөҙөк кейеп йөрөгән, тиҙәр. "Кем аҡыҡ ҡашлы йөҙөк тағып йөрөй, ул һәр саҡ рәхмәттә һәм шатлыҡта булыр", - тигән, имеш, Мөхәммәт бәйғәмбәр.

Аҡыҡты, гәҙәттә, ҡатын-ҡыҙ кейемендә, алҡа, көмөш сулпыларҙың ҡашына, йә булмаһа селтәрҙәргә ҡуйғандар. Аҡыҡ шулай уҡ ир-аттарҙың бай итеп биҙәлгән ҡәмәрендә (көмөш, аҫылташтар менән биҙәлгән биллек) ҡулланылған. Бынан тыш, аҡыҡ ҡашлы йөҙөктәр булған.

Башҡорттарҙың инаныуҙары буйынса, аҡыҡ күҙ тейеүҙән, йыландан, үлемдән һаҡлаусы таш һаналған. Ҡурсалау маҡсатынан йәш киленлдәргә аҡыҡ ҡашлы йөҙөк, беләҙек йөрөтөргә ҡушҡандар. **Мөһөрлө аҡыҡ** тип башҡорттар йөрәк һүрәтенә килтереп, көмөштән бәләкәй генә ай, йондоҙ ҡуйып эшләнгән аҡыҡ ташын ҡулланған. Ул ырым буйынса йөрәк ауырыуынан дауа итеп файҙаланылған.



Аҡыҡ менән биҙәлгән эйәр.





Башҡорт ҡатын-ҡыҙының селтәрендә йөрәк рәүешендә эшләнгән, уртаһында йондоҙ менән ай һүрәтләнгән ҡурсалаусы аҡыҡ.



Аҡыҡ менән биҙәлгән сулпылар.



Башҡорт түрәләре кейгән аҡыҡ ҡашлы йөҙөк.

XVII-XVIII быуаттарҙа Төркиә һәм Фарсы илендә хужаһының исеме яҙылған аҡыҡ ҡашлы йөҙөк киң таралған булған. Ул ҡурсалаусы шәхси талисман һаналған. Былдай йөҙөктәр Башҡортостанда ла киң ҡулланылған. Уны башҡорт старшиналары, кантон башлыҡтары (түрәләре) тағып йөрөр булған.

Аҡыҡтың ҡурсалау көсөнә эйә булыуы тураһындағы башҡорттарҙың инаныуы "Абдрахман" исемле башҡорт халыҡ йырында ла телгә алына. Унда, мәҫәлән, ошондай юлдар бар:

*Унар ғына һумлыҡ, ай, ун аҡыҡ,*
*Һалдыр, егет, эйәр ҡашыңа*

Был йыр 1820-1826 йылдарҙа 6-сы Башҡорт кантоны башлығы булып торған Абдрахман Биктимеровҡа бағышланған. Абдрахман Биктимеров хәҙерге Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылынан булған. Абдрахман кантон ялыу арҡаһында Сенат тарафынан хөкөмгә тарттырыла. Ошо ваҡиғаларға бәйле ижад ителгән "Абдрахман" йырында автор кантон башлығы Абдрахман Биктимеровҡа былай тип мөрәжәғәт итә:

*Унар ғына һумлыҡ, ай, ун аҡыҡ,*
*Һалдыр, егет, эйәр ҡашыңа.*
*Атам дуҫы тиеп ышанма, егет,*
*Атаң дуҫы етер башыңа.*

Йәғни, йырҙың авторы, билдәһеҙ сәсән, Абдрахман кантонға эйәр ҡашын ун аҡыҡ менән биҙәп, кешеләрҙең яуызлығынан, яман һүҙҙәренән, үлемдән һаҡланырға һәм кеше һүҙенә ышанмаҫҡа көңәш бирә. Был йырҙа башҡорттарҙың аҡыҡ ташының ҡурсалау көсөнә инаныуы асыҡ сағыла. Йырҙың икенсе һәм өсөнсө куплеттарында Абдрахман кантондың биргән көңәштәрҙе тотмауы, шуның арҡаһында бәләгә тарыуы хаҡында бәйән ителә.

*Унар ғына һумлыҡ ун аҡыҡлы*
*Эйәрең булыр, егет, ат булһа.*
*Яҡын күргән дуҫтан яманы юҡ,*
*Ауыр саҡта һиңә ят булһа.*

*Унар ғына һумлыҡ, ай, ун аҡыҡ -*
*Кәрәге лә юҡ эйәр ҡашыңа:*
*Атам дуҫы тиеп ышандың, егет,*
*Шул дуҫ етте һинең башыңа.*

Башҡорттар аҡыҡ тип тик сердоликты ғына атамаған. Аҡыҡ исеме бер төркөм таштарға ла ҡулланылған. Мәҫәлән, агат, оникс таштарын да башҡорттар аҡыҡ тип йөрөткән. Опалды халҡыбыҙҙа аҡ аҡыҡ тип атағандар. Сердолик менән бер рәттән, был таштарҙы ла улар биҙәүес әйберҙәр булараҡ киң ҡулланған.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

СӘХИФӘНӘН

# ИНСУЛЬТ БИЛДӘҺЕ НИНДӘЙ?



**Тәбиғәттә ял иткән ваҡытта бер йәш ҡатын ҡапыл абынып ҡолай. Уға ашығыс ярҙам саҡыртырға тәҡдим итәләр, әммә ул бөтәһен дә, барыһы ла һәйбәт булырына, яңы аяҡ кейеме арҡаһында ғына ташҡа эләгеп йығылыуына ышандыра. Йөҙө ағарыуын һәм нисектер хәлһеҙләнеп тороуын күреп, дуҫтары уға ризыҡ алып килә. Ҡалған ваҡытты Ира һәүетемсә үткәрә. Һуңынан ире барыһына ла шылтыратып, ҡатынын дауаханаға оҙатыуын әйтә. Ә киске 11-ҙә ҡатын яҡты донъя менән хушлаша...**

Пикникта ул инсульт үткәргән була. Дуҫтары инсульт билдәләренең ниндәй булғанын белһә, ашығыс ярҙам саҡырыр һәм ул ҡатын бөгөн йәшәр ине. Эйе, ҡайһы берәүҙәр инсульттан һуң шунда уҡ аяҡтан йығылмай. Йыш ҡына ваҡытында кәрәкле ярҙам күрһәтелһә, кеше һауыға. Нейрохирургтар әйтеүенсә, инсульт кисергән кешегә 3 сәғәт эсендә тейешле ярҙам күрһәтелһә, уның эҙемтәләрен бөтөрөргә мөмкин. Уның өсөн сирҙе дөрөҫ диагностикалау һәм тәүге 3 сәғәттә дауалай башлау мөһим.

**Шулай итеп, инсультты асыҡлау өсөн ошо дүрт талапты үтәү кәрәк:**

- кешегә ҡапыл ауыр булып китһә һәм уға табип ярҙамы кәрәклеген тойһағыҙ, уның йылмайыуын һорағыҙ (инсульт булһа, ул быны эшләй алмаясаҡ);
- ябай ғына һөйләм әйттереп ҡарағыҙ (мәҫәлән, "Бөгөн һауа торошо матур");
- ике ҡулын да күтәреүҙе һорағыҙ (ул ҡулдарын тик өлөшләтә генә күтәрер йәки бөтөнләй күтәрә алмаҫ);
- телен сығарып күрһәтеүен һорағыҙ (тел кәкрәйгән булһа, был - инсульт билдәһе).

Ошо билдәләрҙең береһен генә күргәндә лә ашығыс ярҙам саҡыртығыҙ һәм ошо билдә хаҡында телефон аша әйтегеҙ!

Бер кардиолог әйтеүенсә, ошо хәбәрҙе кәмендә 10 кешегә уҡытҡанда, кемдәндер ғүмере ҡотҡарылырына ышанырға мөмкин.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**Исламда кеше тормошоноң барлыҡ яҡтарын күҙ уңында тотҡан әҙәп ҡағиҙәләре һәм нәсихәттәр бар. Шәхес булып үҫешер, кешеләр менән аралашыуҙы яҡшыртыр өсөн кәрәк ул ҡанундар. Һис шикһеҙ, бындай ҡағиҙәләр, нәсихәттәрҙе ҡулланыу кешенең холҡон камиллаштыра, яҡшы һыҙаттарын нығыта, аралашыуҙа ихласыраҡ итә.**

# АТАЙЫҢ БҮЛМӘҺЕНӘ ЛӘ...

## ишек шаҡымай инмә

Ҡағиҙәләрҙе ҡулланыу кешенең үҙ иркендә тип аңларға ярамай, уны һис шикһеҙ ҡулланырға кәрәк. Ни өсөн тигәндә, күп кешеләр иң ябай нәмәләрҙә хата яһай, көнкүрештә күп нәмәгә иғтибар итмәй. Ә был Исламдың камил һәм күркәм булырға тейеш әхләҡ нормаларына зыян килтерә. Бәйғәмбәребеҙ юлға сығырға торған сәхәбәләргә бына ни тигән: "Тиҙҙән һеҙ үҙ туғандарығыҙға килеп етәсәкһегеҙ. Аттарығыҙҙы, йүгәндәрегеҙҙе, кейемдәрегеҙҙе ҡарағыҙ, таҙалыҡ күҙгә ташланып торһон. Сөнки Аллаһ бысраҡты, тәртипһеҙ һәм насарҙы яратмай!"

Шулай итеп, тәү сиратта мосолман кешеһе үҙенең таҙалығы, кейеменең тәртиптә булыуы, теленең матур, йомшаҡ булыуы менән айырылып торорға тейеш.

● Өйҙән сыҡҡанда ишекте шартлатып ябырға ярамай, сөнки был Ислам ҡанундары менән йәшәгән мосолман кешеһенең ипле булыуына ҡаршы килә.

● Өйгә ингәндә һәм сыҡҡанда бөтәһенә лә "Әссәләмәғәләйкүм вә рәхмәтуллаһи вә бәрәкәтүһ" тип өндәшеү хәйерлерәк. Быны хуп күргән Бәйғәмбәр ҙә Әнәскә шулай тигән: "Улым, үҙ ғаиләңә ингән саҡта барыһын да сәләмлә. Бынан һиңә лә, ғаиләңә лә сауап булыр".

● Әгәр ҙә мосолман кешеһе өйгә ҡапыл ғына ҡайтып инә икән, ул был турала ниндәйҙер ысул менән өйҙәгеләргә белдерергә тейеш. Был төрлө ғәйеп эҙләгән йә башҡаларҙы насар хәлдә ҡалдырырға теләгән кеше ролендә булмаҫ өсөн эшләнә. Абдуллах б. Ахмад б. Ханбаль шулай һөйләгән: "Минең атайым мәсеттән ҡайтырға булһа, ҡайтыуы тураһында барыбыҙға ла аяҡ тауыштары ярҙамында йә йүткереп белдерә торғайны". Бәйғәмбәребеҙ шулай тигән: "Арағыҙҙан кемдер өйҙә оҙаҡ булмаған икән, төн уртаһында ҡайтыуҙың бер мәғәнәһе лә юҡ".

Бар ғаилә ағзалары ла бер бүлмәлә булһа, өйгә инеүсе уларға инеү өсөн рөхсәт һорарға тейеш. Был ҡанун барыһы өсөн дә тигеҙ: балалар өсөн дә, ололар өсөн дә. Имам Малик "Муватта" тигән китабында шулай тип яҙа: "Бер кеше Бәйғәмбәрҙән һорай, ти:

- Әсәйгә инер өсөн рөхсәт һорарға кәрәкме?

- Эйе. Әсәйгә барғанда инергә рөхсәт һора.

- Һуң мин бит уның менән бер өйҙә йәшәйем! - тип аптыраған кеше.

- Рөхсәт һора.

- Мин бит уға ярҙам итәм.

- Рөхсәт һора. Һинең бит уны кәрәкмәгәнсә ҡиәфәттә күргең килмәй?

- Эйе шул.

- Шулай булғас, рөхсәт һорарға кәрәк...

● Мосолман кешеһе үҙенең туғандарына, дуҫтарына, таныштарына килгәндә, ишеккә шым ғына итеп шаҡырға һәм холҡһоҙҙарға тиңләшмәҫкә тейеш.

Бер ҡатын, Ахмад б. Ханбалиға килеп, ишегенә бик ныҡ итеп шаҡыған. Ахмад б. Ханбали өйөнән сығып, ҡатынға: "Былай итеп насар уй менән килгәндәр генә шаҡый", - тигән.

Сәхәбәләр Бәйғәмбәрҙең ишеген бармаҡ осо менән генә шаҡый торған булған, ти. Бәйғәмбәр шулай тигән: "Ысынлап әйткәндә, йомшаҡлыҡ, наҙлылыҡ, нимәлә генә күренмәһә лә, кешене биҙәй, уның юҡлығы - насарлай".

Ишеккә бәләкәй генә тәнәфестәр менән шаҡырға кәрәк. Өйҙәге кеше был ваҡытта эшләгән эшен тамамлап өлгөрөргә тейеш (намаҙ уҡыу, тәһәрәт алыу, ашау). Ишеккә өс тапҡыр шаҡығас та хужа асмаһа, тимәк, ҡунаҡ китергә тейеш. Бәйғәмбәр шулай тигән: "Рөхсәтте өс тапҡыр һорарға кәрәк, рөхсәт итһәләр - ин, итмәһәләр - кире ҡайт".

● Инергә рөхсәт һорағанда ишек тапҡырында түгел, унан уңғараҡ йә һулғараҡ торорға кәрәк.

● Ишек шаҡығандан һуң "Кем?" тип һорайҙар икән, "Шундай-шундай кеше" тип яуапларға түгел, теүәл үҙеңдең исемеңде атарға кәрәк. "Был - мин", тиеү ҙә хужаға бер ни ҙә әйтмәҫ. Хужа һине тауышыңдан танып белер, тип тә өмөт итергә кәрәкмәй, тауыштар бер төрлө лә була ала.

Бәйғәмбәр "мин" тигән яуапҡа ыңғай ҡарамаған, сөнки бындай яуап бер ни ҙә аңлатмай. Сәхәбәләре шундай хәҙисте миҫал итеп һөйләй: "Бер ваҡыт мин Бәйғәмбәрҙең ишеген шаҡыным. "Кем унда?" тип һораны ул. "Мин", тип өндәшкәйнем, яуабым уға оҡшаманы..."

Әгәр ҙә кеше ҡапыл ғына килеп, хужа уны ҡаршылай алмай икән, ҡунаҡ үсекмәһен. Имам Малик әйткәнсә: "Һәр сәбәпте лә аңлатып булмай".

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

### Кем кемде өйрәтергә тейеш?

Нисек уйлайһығыҙ, эволюция беҙҙе алға этәме, әллә артҡа һөйрәйме? "Алға!" - тиер күптәр. Бик яҡшы. Был осраҡта, һеҙҙеңсә, кем уҡытыусы, кем уҡыусы булырға тейеш һуң? Әгәр эволюция беҙҙе алға этәрһә, үҫеш кимәлебеҙ атай-әсәйҙәребеҙҙекенән юғарыраҡ, ә балаларыбыҙҙыҡы - беҙҙекенән өҫтөнөрәк булырға тейеш. Тимәк, логика һәм рационализмға буйһонһаҡ, беҙ балаларыбыҙҙы түгел, киреһенсә, улар беҙҙе уҡытырға, өйрәтергә тейеш! Бына ни өсөн мин үҙемдең балаларымды иң яратҡан уҡытыусыларым һәм иҫ киткес остаздарым тип иҫәпләйем.

Мине балаларым нимәгә өйрәтә? Проблемаларҙан арына белергә, аңымды ҡатҡан проблемаларҙан азат итергә һәм иғтибарҙы күңел асыуға һәм уйынға йүнәлтергә. Шулай бер проектымды эшләтеп ебәрә алмай ҡаңғырғанда иҙәндә балаларымдың шау-гөр килеп көлөшөп уйнағандарына иғтибар иттем һәм башыма: "Балалар һәр ваҡыттағыса ошонда һәм хәҙер йәшәргә кәрәклеген күрһәтә", - тигән уй килеп, проектым тураһында баш ватыуымды туҡтатып, уларҙың уйынына ҡушылып киттем һәм кисте уйнап үткәрҙек. Иртәгеһенә таң менән телефон шылтыраны. Быға тиклем ауыр булып күренгән проблема төн сыҡҡансы үҙенән-үҙе хәл ителде. Йыһанға һәм балаларыма уйын өсөн рәхмәт белдерҙем!

### Уҡыуға ҡарағанда уйын мөһимерәк

Балалар тураһында артыҡ һөйләп ваҡыт әрәм итергә теләмәйем, әммә минең өсөн улар ожмахҡа асҡысын символлаштырғас, тағы бер нисә күҙәтеүем менән бүлешмәксемен.

Балаларҙың күпселегенә, үҙҙәрен яҡшы тойор өсөн хәрәкәтләнергә кәрәк. Ләкин мәктәптә уларҙы көн оҙоно дәрестә тик кенә ултырырға мәжбүр итәләр, артыҡ шуҡтарҙы һәм хәрәкәтсендәрҙе яза көтә. Бала тик кенә ултырһа, яҡшыраҡ уҡый, тип иҫәпләнә. Ә уларҙың уҡыуҙы күңелһеҙ шөғөл тип уйлауы берәүҙе лә ҡыҙыҡһындырмай.

Тәү сиратта, бала уйнарға өйрәнергә тейеш. Уйнарға, уйнарға һәм тағы ла уйнарға. Иртәмеһуңмы, уйынға әүрәү уның тағы ла нимә менән дә булһа ҡыҙыҡһыныуына килтерәсәк. Бала үҙенең юлын табыу өсөн нимә эшләргә кәрәклеген үҙе аңлаясаҡ. Әммә был ул уйнап туйғас ҡына киләсәк.

Йыһан аңы сикһеҙ. Һәр ғүмер унда үҙ ролен уйнай. Үҙ аллы балалар үҙ урынын тиҙ таба. Ололар уйлап сығарған ҡағиҙәләр уларҙы дөйөм бер ҡалыпҡа буйһондора һәм индивидуаллеген бөтөрә.

Күпселек ата-әсәләрҙән айырмалы, мине балаларҙың уйын һәм йоҡо бүлмәһендәге тәртип борсой. Үҙҙәренең шәхси тәртибе проблемаларын хәл итә алмаған ата-әсә генә балаларға тәбиғи булмаған тәртип ҡағиҙәләрен көсләп таға.

Түбәндәге тәжрибәне эшләп ҡарағыҙ: ике аҙна дауамында балаларығыҙға нимә теләй шуны эшләргә рөхсәт итегеҙ. Уларға бойороу теләгегеҙҙе тыйып тороғоҙ. Ирекле йәшәргә рөхсәт итһәгеҙ, уларҙы ҡол кеүек файҙаланыуығыҙҙы ла туҡтатырға кәрәк. Һыу эскегеҙ киләме - тораһығыҙ ҙа үҙегеҙ барып алаһығыҙ. Уларҙың был донъяға килеүендә ҡатнашыу балаларҙың һеҙҙең ҡолоғоҙ булырға тейеш тигәнде аңлатмай. Ваҡыты еткәс, улар үҙҙәре һеҙгә хеҙмәт күрһәтер.

Уңыш ҡанунын өйрәнеп, һеҙ тормошоғоҙҙо яҡшыртып ҡына ҡалмайһығыҙ, ә балаларығыҙға үҙ юлын, үҙ тәғәйенләнешен табырға ярҙам да итәһегеҙ. Әгәр улар һеҙҙең бәхетле йәшәүегеҙҙе һәм уңышҡа өлгәшеүегеҙҙе күрһә, үҙҙәре үк артығыҙҙын барырға, һеҙҙең юлығыҙҙы ҡабатларға теләр.

**Пьер МОРАСИ.**

# КЕШЕ - БЕР ТАМСЫ ҠАН ҺӘМ...

## мең төрлө икеләнеүҙәр

Бер көн Мансур хәлифте себен тешләй. Бик асыуланып, ул күренекле дин ғалимы Йәғәфәр әс-Садиҡҡа мөрәжәғәт итә:

- Эй, Абдулла улы! Ни өсөн Алла себенде булдырған?

Имам Йәғәфәр былай тип яуап бирә:

- Мин-минлектәре артыҡ ҙурайып киткәндәргә үҙ урынын күрһәтер өсөн!

***

Бер билдәле яҙыусынан уның шәхси автомобиле булыу-булмауы тураһында һорағандар. "Эйе, мин унда һуңғы юлымда барасаҡмын", - тип яуап бирәгән ул ныҡлы ышаныс менән.

***

Әбү-Хөмәйрәнән һорағандар:

- Иртәгә үлерегеҙҙе белһәгеҙ, нимә эшләр инегеҙ?

- Мин белем алыуымды дауам итер инем, - ти ул артыҡ күп уйлап тормайынса.

***

Бер фәйләсүфтән һорағандар:

- Был донъяла нимәгә эйә булыу иң еңеле?

- Хыялға. Сөнки ул һәммәбеҙҙә лә бар.

***

Бер фәйләсүфтән һорағандар:

- Был донъяла иң ҡатмарлыһы нимә?

Ул былай тип яуап бирә: "Һүҙ. Сөнки уны ҡайһы саҡ аңлауы бик ауыр, шулай уҡ аңлатыуы ла еңел түгел..."

***

"Мин үлемдән ҡурҡам, шуға ла уны яратмайым", - тигән кешегә Хәсән Басрый былай тип әйткән: "Һин уны үҙеңдән һуң байлығыңды ҡалдырырға тейеш булғаның өсөн яратмайһың. Әгәр байлығың һинән алда барһа, һин уның артынан сабыр инең".

***

Бер көн иманлы Рабиғанан һорағандар:

- Кешенең Аллаһы Тәғәләнең ихтыяры менән ҡәнәғәтме-түгелме икәнлеген нисек белергә, ул Хаҡ Тәғәлә ебәргәндәр менән ҡәнәғәтме?

Ул былай тип яуап биргән:

- Кешегә ҡыуаныстар һәм бәләләр килгәндә генә быны асыҡ белергә була: шатлыҡ мәлендә кеше Хаҡ Тәғәләгә рәхмәт белдерә, ҡайғылы мәлендә - күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәй, ә үҙе кисергән хәлдәрҙән фәһем-һабаҡ ала.

***

Бер көн Сәғәҙей Ширазиҙан һорайҙар:

- Нимә ул кеше?

Уның яуабы:

- Бер тамсы ҡан һәм мең төрлө икеләнеүҙәр.

***

Бер ғалимдан ҡайҙан белем алыуы тураһында һорағандар икән, ул:

- Һуҡырҙарҙан, сөнки алда ни булғанын тикшермәй тороп, улар бер аҙым да атламай, - тип яуап биргән.

***

Абу Дарда ярлылыҡҡа зарланған ҡатынына: "Түҙ, беҙҙең алда шундай бейеклек буласаҡ, ә унда йөгө ауыр булмағандар ғына менә ала", - тигән.

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ҠЫҘЫЛ БАЙРАҠ ОРДЕНЫ КАВАЛЕРҘАРЫ




**16 сентябрҙә беренсе совет ордены булдырылыуға 105 йыл тула. Социалистик ватанды һаҡлауҙа айырыуса батырлыҡ, фиҙаҡәрлек, ҡыйыулыҡ күрһәткәне өсөн наградалау маҡсатында барлыҡҡа килгән ул. Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән хәрби частар, хәрби караптар, дәүләт һәм йәмәғәт ойошмалары бүләкләнә. 1930 йылда Ленин ордены булдырылғанға тиклем Ҡыҙыл Байраҡ ордены Советтар Союзының иң юғары ордены һанала.**

1917 йылдың 17 (30) декабрендәге Бөтә хәрби хеҙмәткәрҙәрҙе тигеҙ хоҡуҡлы итеү тураһындағы декрет Рәсәй империяһының барлыҡ ордендары һәм башҡа отличие тамғаларын бөтөрә. Ордендар урынына исемле сәғәт, портсигар, револьвер һ.б. тапшырыла башлай. 1918 йылдың 3 августында РСФСР-ҙың Хәрби һәм диңгеҙ эштәре буйынса Халыҡ комиссариаты коллегияһы ағзаһы Н.И. Подвойский башланғысында индерелгән "Почетлы революцион Ҡыҙыл Байраҡ" беренсе официаль совет дәүләт наградаһы һанала. Ул Эшсе-крәҫтиән Ҡыҙыл армияның айырыуса батырыҡ күрһәткән частарына тапшырылған байраҡ рәүешендә булған. Ә 1918 йылдың 13 авгусында Николай Подвойский Я.М. Свердловҡа юллаған телеграммаһында Ҡыҙыл Армия өсөн дә шәхси отличие тамғалары булдырырға тәҡдим итә. 1918 йылдың 2 сентябрендә ВЦИК кәңәшмәһендә махсус комиссия төҙөлә, күп тә үтмәй уның ағзалары ике төрлө шәхси награда тамғаһын тәҡдим итә: "Ҡыҙыл Байраҡ" ордены һәм "Ҡыҙыл Ҡәнәфер" ордены. 14 сентябрҙәге ВЦИК ултарышында тәүге вариант һайлана. Ә инде 1918 йылдың 16 сентябрендә "Отличие тамғалары тураһында" декретҡа ҡул ҡуйыла һәм "Ҡыҙыл Байраҡ" ордены раҫлана. Ордендың эскиз проектын рәссам В.И. Денисовҡа эшләргә ҡушыла, әммә ул сирләү сәбәпле, һүрәтте улы Владимир төшөрә. Владимир Васильевич алты төрлө һүрәт тәҡдим итә, береһе һайлап алына һәм 1918 йылдың 4 октябрендә ВЦИК Президиумы тарафынан раҫлана. 1924 йылдың 1 авгусында ошо орден нигеҙендә бөтә союз "Ҡыҙыл Байраҡ" ордены булдырыла, унда "РСФСР" урынына "СССР" тип яҙыла башлай. Был награда шулай уҡ Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ ордены тип тә йөрөтөлә.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**35-се һандағы сканворд яуаптары.**
**Горизонталь буйынса:** Катод. Юнысова. Боғарлаҡ. Ҡаурый. Буран. Наян. Арпа. Утар. Осарбалыҡ. Сейә. Арба. Рәшә. Навахо. Тракт. Токио. Әүәл. Таба. Кеҫә. Тәкә. Ниәт.
**Вертикаль буйынса:** Барометр. Бураҡаева. На. Бүртә. Юнга. Үҫенте. Ринг. Алыш. Әтлек. Уҡа. Екән. Ҡанат. Көрҫ. Диван. Әлтә. Ҡаһарманова. Совет. Рига. Йәғәфәрова.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**21 сентябрь "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**22 сентябрь "Звезда Героя"** (Ф. Әхмәҙиев, О. Мусина), һуғыш осоро хроникаһы. 16.00 12+
**23 сентябрь "У ковчега в восемь"** (У. Хуб), ғаилә өсөн спектакль. 12.00 6+
**24 сентябрь "Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбай), музыкаль комедия. 18.00 16+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*
**23 сентябрь "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова). 12.00 14.00 0+
**24 сентябрь "Три поросенка"** (Д. Гараева). 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**21 сентябрь** Рәсәй милли оркестры. Мәскәү. 6+
**22 сентябрь** Камерный оркестр концерты. 6+
**24 сентябрь** Бородин исемендәге квартет. 18.00 6+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**19-20 сентябрь Премьера! "Әлдермештән Әлмәндәр"** (Т. Миңнуллин), фантасмагория. 12+
**21 сентябрь "Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 12+
**22 сентябрь "Һинән - фатир, минән - ир!"** (Н. Ғәйетбай), комедия-гротеск. 16+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**21 сентябрь "Йөрәктән - йөрәккә"** 33-сө концерт миҙгелен асыу. 6+

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

# ТЕАТР ГАСТРОЛДӘРЕ

**19-20 сентябрҙә М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының Нальчикта (Ҡабарҙы-Балкар Республикаһы) "Ҙур гастролдәр"е башлана.**

Театрҙың матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, "Ҙур гастролдәр"ҙең төбәк-ара йүнәлеше сиктәрендә М. Горький исемендәге Рус драма театры сәхнәһендә "Мышиная история", "Внутри меня цунами", "Һинһеҙ килгән яҙҙар" спектаклдәре күрһәтеләсәк. "Берҙәм гастролдәр системаһын яңыртыу идеяһы бөтә илдең ижади коллективтары яғынан хуплау тапты. Бөтә Рәсәй гастроль-концерт планының "Ҙур гастролдәр" һәм "Беҙ - Рәсәй" программалары йылдан-йыл ҡатнашыусыларҙы күберәк йәлеп итә. Йөҙәрләгән артист Ватаныбыҙҙың төрлө төбәктәренә юлланыу, үҙенсәлекле һөнәри тәжрибә һәм ижади көс туплау, ә урындағы халыҡ иң яҡшы спектакль һәм тамашаларҙы ҡарау мөмкинлеген алды", - тип билдәләне РФ мәҙәниәт министры Ольга Любимова.

*Театр бит ул коллектив эште ярата, режиссер иһә дөрөҫ ойоштора белергә тейеш. Ә артистар инде - тыуҙырыусылар, һәр береһе үҙенең образын юктан бар яһай. Күмәкләгән яу ҡайтарған, эште урынына еткереп атҡарырбыҙ.*



СӘНҒӘТ ДОНЪЯҺЫ

# МИҘГЕЛДӘРҘӘН ТОРА БЫЛ ТОРМОШ

**Йылдағыса, вәғәҙәһеҙ, бер ниһеҙ, йола буйынса Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры үҙенең Ижади миҙгелен аса. Ябылғанды яңынан асыу, тип ҡабул итмәгеҙ. Был осраҡта асыу һүҙенә тәрән мәғәнә һалынған. Асыу! Тимәк, яңырыу, дәртләнеү, йәшәреү, өмөт менән йәшәү! Ижади миҙгел быйыл нисек асыласаҡ, театр коллективының кәйефе ниндәй? Нимә көтә беҙҙе тантаналы көндә? Ошо турала һорашып, театрҙың баш режиссеры Денис Сәлим улы НУРҒӘЛИНгә мөрәжәғәт иттек:**



- Ижади миҙгелдәрҙе асыу һәм ябыу үҙенә күрә бик мәртәбәле йола ғына. Әлбиттә, театр үҙ эшен миҙгел ябылғас та дауам итә, гастролдәр, йәйге ялдарҙан тыш, йыл дауамында бара. Хатта ки, киреһенсә, эштәр ул осорҙа ҡыҙыуыраҡ була. Әлеге көндә артистарыбыҙҙың бер төркөмө ауылдар буйлап гастролдә йөрөй, ҡалғандар Туфан Миңнуллиндың "Әлдермештән Әлмәндәр" пьесаһы буйынса спектакль әҙерләй. Автор әҫәрҙең жанрын моңһоу комедия тип ҡуйған, жанрын үҙгәртеп, фантасмагорияға тартым әҫәр тыуҙырырға тырышабыҙ.

Ни өсөн яңы алымдар ҡулланабыҙ? Сөнки театрҙа жанрҙар төрлөлөгө булырға тейеш. Мәҫәлән, бөтә тамашасылар ҙа тик драма ғына ҡарарға яратмай бит, кемгәлер комедия оҡшай, трагедия ҡарарға теләгәндәр ҙә бар. Нәфис фильмдарҙы алһаң да, берәүҙәр фантастика ҡарай, икенселәр - мелодрама, тормош шулай ҡоролған. Тамашасыларҙың ихтыяжын күҙ уңында тоторға, театрҙың үҫешен дә иҫәпкә алырға кәрәк, артистар өсөн дә төрлө жанрҙа эшләү ҡыҙығыраҡ. Көн һайын аҡ икмәк ашап ултырып булмай бит, ҡай саҡ ҡара икмәк ашағы ла килеп китә. Кемдер, жанрҙар төрлөлөгө театрҙың йүнәлешен үҙгәртә, тип уйларға мөмкин. Юҡ, бындай яңы алымдар эшмәкәрлекте һис тә төп эшенән ситләтмәй. Хәҙерге заманда интернет бар, һәр кешенең ҡулында телефон, ауыл кешеһе менән ҡала кешеһенең менталитеты айырылмай тиерлек. Замана кешеһе бик мәғлүмәтле, яңылыҡтарҙы белә, ишетеп, күреп тора. Элек колхоз-совхоз осоронда халыҡ баш баҫып, тандан төнгә тиклем баҫыуҙарҙа, фермаларҙа эшләне, биш көн эшләп, ике көн ял иткән ҡала кешеһе менән ауыл кешеһе араһында айырма бар ине. Хәҙер, етмәһә, һәр кешелә машина бар, ҡайҙа теләй, шунда ултырып сыға ла китә. Теләһә, баш ҡалаға барып, спектакль ҡарай ала. Шундай мөмкинлектәре булған тамашасыны жанрҙарҙың төрлө булыуы ҡыҙыҡһындыра ғына.

Беҙҙе йыш ҡына халыҡсан театр, тип, халыҡ театры менән сағыштыралар, әммә күп кеше шуны аңлап етмәй: халыҡсан тигән һүҙ, халыҡҡа яҡын, тигәнде аңлата. Театрҙың тарихын ҡараһаң, беренсе аҙымдарынан уҡ ул халыҡ өсөн эшләгән тәгәрмәс өҫтөндәге театр булған, ауылдар буйлап йөрөп, театрға һөйөү тәрбиәләгән. Бөтә кешенең дә театрға килеп, спектаклдәр ҡарарға мөмкинлеге юҡ, ауыл килеп ҡарай алмай бит инде. Мөхәммәт тауға бармаһа, тау Мөхәммәткә бара, тигәндәй, беҙ үҙебеҙ халыҡ өсөн эшләйбеҙ, хеҙмәт итәбеҙ, бурыс ҡайтарабыҙ.

Аллаһ бойорһа, премьерабыҙ менән миҙгелде асырбыҙ, тип, ниәт итәбеҙ. Репетициялар һәйбәт бара, материал ауыр, ваҡыт тар. Шуға ҡарамаҫтан, артистар тырышып эшләй, һәр кем үҙ персонажының образын тыуҙыра. Спектаклдең композиторы Рәмил Мәхийәнов бик матур көйҙәр яҙа, Залина Усманова пластик хәрәкәттәр һала башланы. Ҡуйыусы-рәссам Зилә Нурғәлиеваның эшен премьера ваҡытынды баһаларһығыҙ. Театр бит ул коллектив эште ярата, режиссер иһә дөрөҫ ойоштора белергә тейеш. Ә артистар инде - тыуҙырыусылар, һәр береһе үҙенең образын юктан бар яһай. Күмәкләгән яу ҡайтарған, тигәндәй, таныш эште урынына еткереп атҡарырбыҙ. Артистарҙың эше сәхнәлә күренер, ә бит күренмәгән кешеләр ҙә бар был коллектив хеҙмәттә. Костюмерҙар, тегеү цехы, бутафорҙар, реквизиторҙар, декораторҙар ҙа күмәкләп дөйөм эште башҡара.

Спектаклдең үҙенә килгәндә, ул тормошто һөйә белергә өйрәтә, ынтылышлы йәшәргә саҡыра. Хәҙер бит күп кеше зарланырға ярата. Беҙҙең бөтә нәмәбеҙ ҙә бар, ә беҙгә һәр ваҡыт ниҙер етмәй. Улай булырға ярамай, шөкөр итә белергә, тормоштоң мәғәнәһен, ҡәҙерен белеп ҡалырға кәрәклеге тураһында һөйләнә был спектаклдә. Тамашасылар үҙҙәре күрер, аңлар. 19 сентябрь киске спектаклгә - премьераға, миҙгел асыу тантанаһына рәхим итегеҙ!

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**яҙып алды.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

## КЕЙЕҘ ОҪТАЛАРЫ ЙЫЙЫЛДЫ




**Өфөлә "Войлокфест" II республика асыҡ художестволы кейеҙ фестивале "Ижад" күргәҙмә залында асылды. Быйыл фестиваль Педагог һәм остаз йылына арнап уҙғарыла.**

Сараны идея авторы, кейеҙ буйынса рәссам, Өфөнөң 2-се Балалар художестволы мәктәбе уҡытыусыһы Ләйсән Ғилманова, фестивалдең ойоштороусылар комитеты рәйесе, ойоштороусы учреждение директоры Наил Мәзитов асты. Ҡатнашыусыларҙы проекттың ғилми етәксеһе, сәнғәт белгесе, М.В. Нестеров исемендәге Башҡорт дәүләт художество музейы директоры урынбаҫары, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Светлана Игнатьенко сәләмләне. Тантана кейеҙ әйберҙәр дефилеһы менән тамамланды.

Фестиваль сиктәрендә Башҡортостан ғына түгел, Рәсәй һәм сит илдәрҙән йәш рәссамдар араһында кейеҙҙән иң яҡшы художестволы эшкә конкурс күргәҙмәһе уҙғарыла. "Һайлап алыу турына 469 ғариза килде, күргәҙмәлә ҡатнашыуға 104 эш һайлап алынды: 56 номинацияла "Интерьер предметтары", 10 - "Кейем һәм аксессуарҙар", 16 - "Ҡурсаҡ, уйынсыҡ һәм сувенирҙар", 9 - "Арт-объекттар", 13 - "Коллектив эштәр". Нәҡ ошо эштәр араһынан конкурс жюриһы еңеүселәрҙе билдәләйәсәк", - тинеләр 2-се Балалар художество мәктәбенән.

Конкурс күргәҙмәһенән тыш, фестиваль көндәрендә киң мәҙәни-белем биреү программаһы бойомға ашырыласаҡ. Унын сиктәрендә оҫталыҡ дәрестәре, ижади осрашыуҙар, лекциялар, дефиле, квестар ойоштороласаҡ.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## МАЙҘАНДА ЙЫҠҠАН БАТЫРҘАН...

### яуҙа йыҡҡан батыр оло

Һары мәтрүшкә алтмыш төрлө ауырыуға, көрән мәтрүшкә етмеш төрлө ауырыуға дауа.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше урам буйлап үтеп барғанда тоҡсай тотоп торған ҡартты һәм уны уратып алған балаларҙы күреп ҡала. Ҡарт балаларҙың һәр теләген үтәй икән. "Мин уйынсыҡ машина теләйем", ти бер малай. Һәм ҡарт тоҡсайҙан уйынсыҡ машина алып бирә. "Ә миңә яңы күлдәк кәрәк", ти ҡыҙыҡай. Ҡарттың тоҡсайынан өр-яңы күлдәк килеп сыға. "Был бит тылсымсы", тип уйлай күҙәтеп торған кеше. Һәм балаларҙың таралышҡанын көтөп ала ла, ҡартты тотоп алып, өйөнә алып ҡайта. "Хәҙер һин минең теләктәрҙе генә үтәйәсәкһең", - ти кеше.**

**- Ярар, - ти ҡарт, - әйт теләгеңде.**

**- Донъялағы иң шәп машинала йөрөгөм килә.**

**Ҡарт тоҡсайынан машинаның асҡысын сығарып бирә. Ә кеше ҡартты өйөнә бикләп сығып китә. Бер аҙнанан ҡайтып, ҡартты әрләргә тотона:**

**- Һин мине алдағанһың. Минеке кеүек ҙур һәм матур машиналар урам тулы. Миңә бер кем дә иғтибар итмәй.**

**- Ни кәрәк һуң һиңә?**

**- Миңә күп аҡса кәрәк.**

**Ҡарт тоҡсайынан чек сығарып бирә. Теге кеше өйөн бикләп, йәнә сығып китә. Аҙна үткәс, тағы асыуланып ҡайта:**

**- Һин мине алдағанһың. Мин баҙарҙа йөрөп, йәнем теләгәнде һатып алдым. Ләкин башҡа кешеләр ҙә шул уҡ әйберҙәрҙе һатып алды.**

**- Ни теләйһең?**

**- Донъялағы иң матур ҡатын-ҡыҙ минеке булһын, - ти кеше һәм ҡартты бикләп, тағы ла сығып китә. Бер аҙнанан һуң ҡайтып, йәнә ҡәнәғәтһеҙлеген белдерә:**

**- Иң гүзәл ҡатын-ҡыҙ өсөн барыһын да эшләргә әҙер булдым. Ә уға аҡсам ғына кәрәк булған икән.**

**- Һин өс теләк әйттең, ләкин теләгәндәреңде һорамаының, - ти ҡарт.**

**- Нисек инде улай?**

**- Һин машина һораның, ә ысынында хөрмәт теләнең, аҡса һораның, тик үҙаллылыҡ теләнең, ҡатын-ҡыҙ һораның, ләкин мөхәббәт теләнең. Хөрмәт, үҙаллылыҡ һәм мөхәббәтте мин һиңә бирә алмайым. Уларҙы кешеләр үҙҙәре яулап ала. Хәҙер мин китәм.**

**- Мин һине ебәрмәйем, - ти кеше.**

**- Мин теләгән ваҡытта китә ала инем.**

**- Ни өсөн китмәй, теләктәремде үтәнең һуң?**

**- Бер ай ял итеп алырға теләгәйнем, ялым бөттө, - ти ҙә ҡарт, тоҡсайына инеп юҡ була".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 23036

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
15 сентябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3177
Заказ - 1265